ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

16-22 апрель (алағарай) 2016

№16 (694)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡышҡы урманда аҙашһаң…**

нисек ҡотолорға беләһеңме? **3**



**Кешенең йыһанды яулауы** **6-7**



**Законы тормош кеүек:**

үҙгәрә, яңыра, төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индерелә… **8-9**



**Хыялға эйәреп…**

бейенем дә киттем **11**



**ТВ-программа** **14**


***Балалар - атайҙары тураһында: 6 йәштә: "Атайым бөтәһен дә белә"; 10 йәштә: "Атайым күп нәмә белә"; 15 йәштә: "Атайым белгәнде, мин дә беләм"; 20 йәштә: "Атайым артыҡ күп нәмә белмәй, ахыры"; 30 йәштә: "Атайым менән кәңәшләшеп алыу насар булмаҫ ине"; 40 йәштә: "Нимә генә булһа ла, атайым бер аҙ аңлай"; 50 йәштә: "Атайым бөтәһен дә белә"; 60 йәштә: "Эх, атайым иҫән булһа ине... Мин уның менән кәңәшләшер инем".***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең өсөн ниндәй тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлап ҡалыр инең?

***Гәзимә ИШТУҒАНОВА, режиссер:*** Тарихи ҡомартҡылар тураһында әйткәндә, һис шикһеҙ, тәүге урынға Салауат Юлаевтың һәйкәлен ҡуйыр инем, сөнки ул милли батырыбыҙ, рухыбыҙҙы күтәрә торған һәйкәл. Тәбиғи ҡомартҡыларға килгәндә, Башҡортостанымдағы һәр тәбиғи объект һаҡланырға тейеш. Хатта мин был ерҙә үҫкән еләк-емештәрҙе, сәскә-үләндәрҙе, ҡыуаҡ-ағастарҙы ла һаҡларға кәрәк, тип уйлайым. Сөнки башҡорт балы, башҡорт ҡымыҙы үҙенең сифаттарын юғалтмаһын өсөн тап ошо тәбиғи шарттарҙа яһалырға тейеш.

Матди булмаған тағы бер бөйөк әйберебеҙ - "Урал батыр" эпосыбыҙ бар беҙҙең. Иғтибар итһәгеҙ, кино тарихындағы эре кинопроекттар - "Властелин колец", "Гарри Поттер" нисек донъяны шаулата. Беҙ ошо эпосыбыҙ буйынса кино төшөрһәк, башҡа халыҡтар уны әкиәт итеп ҡабул иткән хәлдә лә, беҙҙең өсөн ул башҡорттоң асылын, донъяға ҡарашын, фәлсәфәһен, хатта шул уҡ тәбиғи ҡомартҡыларыбыҙҙы ла сағылдырасаҡ әйбер булыр ине. Нисек донъя яралғанын һөйләүсе был сығанаҡ Ғаләмдәр киңлегенән ҡараш ташлай алған оҫтаһын көтә. Йәшәүҙең һәм тәбиғәттең мәңгелеге, яҡшылыҡтың гел генә яуызлыҡты еңеүе кеүек темалар бер ҡасан да әһәмиәтен юғалтмай.

***Айһылыу ҒӘЛЛӘМОВА, филология фәндәре кандидаты:*** Ошо көндәрҙә халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар көнө билдәләнә түгелме һуң әле? Мин Салауат Юлаевҡа һәйкәлде индерер инем был исемлеккә. Улымды Салауат рухында тәрбиәләйәсәкмен, тип гел генә уйлайым. Әле ул бәләкәй, һүҙ аңларлыҡ булғас, уны мотлаҡ Салауат Юлаев һәйкәленә алып барып, уның, тимәк, башҡорт халҡының да шанлы тарихын һөйләйәсәкмен. Уға ҡағылышлы риүәйәт-легендаларҙы белһен, уға бағышланған йырҙарҙы тыңлаһын.

Минең өсөн Салауат Юлаев - яугир ғына түгел, ә йырсы, шағир, философ та. Ул халҡыбыҙҙың менталитетына хас бөтөн һыҙаттарҙы үҙенә йыйған. Салауат күптән юҡ, тик уны хәтерендә һаҡлаған халҡы, уның рухына бағышланған кинофильмдар, картиналар, йырҙар, һәйкәлдәр бар. Һәйкәл - тәү сиратта, тәрбиә сығанағы. Уйланып йөрөйөм дә, берәй мәшһүр башҡорт ғалимына, әйтәйек, Роберт Байымовҡа, Нияз Мәжитовҡа ла кәрәк ине һәйкәл. Тарихта ҙур эҙ ҡалдырған башҡа шәхестәребеҙ ҙә бар. Яңыраҡ барлыҡҡа килгән "Ете ҡыҙ" һәйкәле ҡалай матур күренеш булды, ошо ерҙә борондан йәшәгән башҡорттоң легендаһы һәйкәл булып ҡалҡты.

(Дауамы 2-се биттә).

ОҺО!

## ШӘП САРА!

Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты башҡорт теленән диктант яҙыу ойоштора. Сара 23 апрелдә сәғәт 10-да Башҡорт дәүләт университетының төп корпусының 01 һәм 02 һанлы аудиторияларында үткәрелә. Ошо уҡ ваҡытта диктант яҙырға теләүселәр БДУ-ның Стәрлетамаҡ, Сибай, Бөрө, Нефтекама, Учалы филиалдарында, республиканың юғары уҡыу йорттарында, колледждарҙа, мәктәптәрҙә һ.б. ойошмаларҙа ла йыйыласаҡ. Башҡа төбәктәрҙә йәшәүселәр, БДУ-ның regdict.bashedu.ru сайтына инеп, диктант яҙыуҙы үҙ аллы ойоштора, йәғни онлайн рәүештә яҙа ала. Акцияла теләгән һәр кеше ҡатнашып, үҙенең белемен тикшерә ала. Аҙаҡ диктант яҙғанда күрһәткән псевдоним йәки серле һүҙ буйынса БДУ-ның regdict.bashedu.ru сайтынан һөҙөмтәләрҙе ҡарарға була.

УҠЫЙБЫҘ...

# БЫЛ ИХТЫЯЖДЫ...

## китап йә гәзит кенә ҡандыра

**Бөгөн китап йә гәзит уҡыусылар һирәк, тиһәләр ҙә, минең үҙемдең таныштарым араһында ундайҙар юҡ иҫәбендә. "Шул авторҙың шундай яңы әҫәре сыҡҡан", тигәндә күптәрҙең ҡолағы ҡарп итеп ҡала. Шундуҡ уҡып сығырға теләк белдерәләр. Үҙем дә кистәрен ҡулыма мотлаҡ йә гәзит-журнал, йә китап тота һалам. Уҡыу ихтыяжын телевизор ҙа, интернет та ҡәнәғәтләндерә алмай.**

(Дауамы 3-сө биттә).




12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МӨХӘМӘТҠУЖА ҠАРТ КЕҮЕК...

**Зөфәр ТОЛОМҒУЖИН, Рәсәй һәм БР журналистар союзы ағзаһы:** Бына нисәмә йылдар инде, ауылда донъя көткән ир-егеттәр ғаиләһенән айырылып, һаулыҡтарын ҡаҡшатып, Себер яҡтарында эшләп йөрөмәһен, үҙенең эшен аҫһын ине, тигән хыял-борсолоу менән йәшәйем. Ә бит шул егеттәр ауылда ла эш таба, ауылдаштарын да эшле итеп, күптәрҙе Себергә китеүҙән, йә башҡа урындан килем эҙләүҙән арындыра алыр ине. Быны өсөн теләк һәм тырышлыҡ ҡына кәрәк, ә юридик яҡтан һәм һалым системаһына ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса белем, эшләй-эшләй, тәжрибә менән килә ул.

Ауыл ерендә милли аш-һыуҙар етештереп һатып аҡса эшләүселәр бар. Берҙән, үҙенә ниндәйҙер килем алһаң, икенсенән, үҙебеҙҙең натураль продукцияны популярлаштырыуға ярҙам итәһең. Әлеге көндә ҡымыҙ, талкан, туҡмас етештереү һ.б. цехтар аҫҡан кешеләрҙе беләм. Мин дә ваҡытында ағас эшкәртеү буйынса кооператив предприятие асып ҡараным. Бирелгән 100 кубометр ағастан бура бурап та, тәрләсә эшкәртеп тә һаттыҡ. Был рәүешле кәсеп итеүҙән килем килмәгәс, 10 кубометр йүкә ағасы һатып алдым да, һалабаш һыҙырып, бумала етештереп һатыу итеүгә керештем. Был кәсебем бөтә һалымдарҙы түләп, кредит алмайынса 3-4 йыл эшләп, йорт һалып сығырға мөмкинлек бирҙе.

Ҡайһы берәүҙәр мал-тыуар үрсетә, фермер хужалығы ойоштора бөгөн. Үҙ эшеңде асыу, башҡаларҙы эш урыны менән тәьмин итеү бөтәһенән дә ҡулынан килмәй, әлбиттә, сөнки һәр кем ойоштороусы һәләтенә эйә түгел. Шулай ҙа тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тигәндәр бит әле. Мин һәр ваҡыт олатайымдың атаһы - Мөхәммәтҡужаның миҫалын иҫтә тотам. Ул Ишембай районы Һайран ауылында Минһаж байҙа ялсылыҡта эшләгән. Ете йыл эшләгәндән һуң бай уны өйләндереп, бер баш бейә малы биргән. Революция башланғанда Мөхәммәтҡужаның 67 баш йылҡыһы иҫәпләнгән. Тимәк, тәүҙә байға бил бөкһә лә аҙаҡ үҙенең йүнен үҙе күреп, хәлле кешегә әйләнеп киткән. Шуның кеүек, Себерҙә йәки ҡайһылыр бил бөгөп тапҡан аҡсаны быуа шулай ишәйтеү яғын да ҡарарға кәрәк егеттәребеҙгә. Унан һуң, Себерҙә бер ай эшләп, 40 мең алып ҡайтып, бер ай ял иттең ни ҙә, ауылда фермер хужалығында ай һайын 10 мең хеҙмәт хаҡы һәм өҫтәүенә хужалыҡҡа кәрәк-яраҡ алдың ни - артыҡ айырма юҡ. Әммә ни өсөндөр ауылдаш фермерға эшкә ялланырға тартына беҙҙекеләр. Әгәр ҙә фермер яҡшы эш хаҡы түләй, үҙегеҙҙең шәхси хужалыҡта эшләргә ваҡыт та ҡала икән, ояларға бер сәбәп тә юҡ. Тырышып донъя көтөүселәр, Мөхәммәтҡужа ҡарт кеүек, үҙенең килемен арттырыу тураһында ла хәстәрлек күрә алыуы көн кеүек асыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең өсөн ниндәй тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлап ҡалыр инең?

(Башы 1-се биттә).

***Регина ФАЗЫЛОВА, БР Милли әҙәбиәт музейы ғилми хеҙмәткәре:*** Шундай гүзәл тәбиғәтле Башҡортостаныбыҙҙың йылғалары, күлдәре, тауҙары, мәмерйәләренең барыһын да шул килеш кенә һаҡлап ҡала алһаҡ ине лә ул. Һәр кемгә үҙ төбәге ҡәҙерле, бөрйәндәр - Шүлгәнташын, баймаҡтар - Ирәндеген, учалылар - Ирәмәлен, ишембайҙар - Торатауын, салауаттар Янғантауын атар ине ғорурланып. Әлшәй районында тыуып-үҫкән кеше булараҡ, мин Дим йылғаһын, Сусаҡ тауын телгә алғым килә. Тик йылғаға һыу инергә барһаҡ, балалар менән 1-2 тоҡ сүп йыйабыҙ тәүҙә, беҙ тауға менеп төшкәнсе, әсәйем тоҡлап сүп-сар йыйя тора итәгендә - шуныһы йәнде әрнетә. Еребеҙ, һыуыбыҙ һаҡлауға ныҡ мохтаж бөгөнгө көндә. Балаларҙа тәүҙә ошо ер өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә кәрәктер, сөнки тыуған илгә һөйөү үҙеңдең бәләкәй ватаныңды яратыуҙан башлана.

Төйәгебеҙҙәге һәр ҡыуаҡ, һәр таш тарих һөйләй, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Башҡорттоң йыры ла, риүәйәте лә ошо ергә бәйле, ошо ергә дан йырлай. Борондан һүҙ ҡәҙерен белгән халыҡ булғанбыҙ, бөгөн дә мин быны күҙәтә йөрөйөм. Былтыр Әҙәбиәт йылында бөтөн республиканы урап сығырға мөмкинлек тыуҙы, ауылдарҙа үҙ төбәгенән сыҡҡан яҙыусыларға, шағирҙарға музейҙар асыла. Тарихи ҡомартҡы булараҡ, үҫеп килгән быуынды илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләүҙә музейҙарҙың да әһәмиәте ҙур. Бөгөн БР Милли әҙәбиәт музейының 5 филиалы, дөйөм алғанда, Башҡортостанда 24 әҙәбиәт музейы бар. Әҙәбиәт музейында әҙиптәрҙең ижады, тормошо менән таныштырыға була. Күсмә күргәҙмәләр, мәктәп уҡыусылары, студенттар, әҙәбиәт һөйөүселәр менән берлектә түңәрәк өҫтәлдәр ойошторола. Фондтар тулыландырыу өҫтөндә, шуға ла яҙыусылар ҙа, ауылда минә арналған музей бар, тип тынысланмаһын ине. Оптималләштереү мәлендә төрлө хәл булыуы ихтимал, шуға ла ҡулъяҙмаларҙың, фотоларҙың һ.б. төп нөсхәһе беҙҙең музейҙа һаҡланырға тейеш. Әле яңыраҡ ҡына бер ауылда музей ябылған да, бороңғо китаптарҙы халыҡҡа таратҡандар, тип ишеттем. Кемдер был китаптарҙың ҡәҙерен белер, әл-биттә, тик кемдер сүплеккә ташлауы ла ихтимал. Быны ошо ҡомартҡыларыбыҙ тураһында ла уйланырға кәрәк беҙгә.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдән 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу хаҡтары бер аҙ ҡиммәтләнһә лә, уҡыусыларыбыҙ беҙҙең дуҫлыҡҡа тоғро ҡалыр, тип ышанабыҙ. Шулай итеп, бынан һуң 50665 индексы "Киске Өфө"гә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ә гәзиттең 50673 индексы ойошмалар һәм предприятиелар өсөн тәғәйенләнгән һәм хаҡы - 604 һум 32 тин. 50665 индексы менән шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 511 һум 02 тингә яҙыла ала.**




● Дәртләндереү саралары дауам итә. Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын апрелдә ебәргәндәрҙән кемдәрҙер бүләккә **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** (русса) һәм башҡа китаптар алып ҡыуаныуы бик ихтимал.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша vip-ishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog. kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ етәксеһе Игорь Баринов менән осрашты. Осрашыуҙа милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тикшерелде. Игорь Баринов бер йыл элек булдырылған Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ алдындағы бурыстар хаҡында һөйләне. "Беҙ 85 субъекттың барыһына ла милләт-ара, конфессия-ара мәсьәләләр менән шөғөлләнәсәк бүлек берҙәм блокка берләштерелергә һәм төбәк башлығының эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары етәкселегендә булырға тейеш, тигән тәҡдим индерә башланыҡ. Реаль сәйәсәт субъект, муниципалитеттар кимәлендә бара", - тип билдәләне И. Баринов.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Магомедсалам Магомедов менән осрашты. Осрашыу барышында милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу һәм милләт-ара татыулыҡты нығытыу мәсьәләләре тикшерелде. Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары "Төркиҙәр алтыны" төрки йәштәренең халыҡ-ара форумында ҡатнашыуы тураһында белдерҙе. "Илебеҙҙә төрки төркөмөнә ҡараған 29 милләт йәшәй. Башҡорт халҡы - күп һанлыларҙың береһе. Республиканың һәм башҡорт халҡының илдең үҫешенә индергән өлөшө ғәйәт ҙур", - тине Магомедсалам Магомедов.

✓Ғинуар-март айҙарында Башҡортостанда финанслауҙың бөтә сығанаҡтары иҫәбенә дөйөм майҙаны 494,8 мең квадрат метрлыҡ 5900 фатир сафҡа индерелгән. Башҡортостандың торлаҡ төҙөлөшө структураһында халыҡтың өлөшө ҙур - 69,9 процент. Быйыл беренсе кварталда республика халҡы үҙ иҫәбенә һәм кредит алып 345,7 мең квадрат метрлыҡ 3105 шәхси йорт төҙөгән - 2015 йылдың ошо уҡ осорона ҡарата 1,5 процентҡа күберәк.

✓Башҡортостанда ағымдағы йылдың 1 майынан иҡтисадтың бюджеттан тыш секторы өсөн минималь хеҙмәт хаҡын 8900 һум күләмендә билдәләү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Федераль кимәлдә ҡабул ителгән ҡарарға ярашлы, 2016 йылдың 1 июленән бюджет секторы өсөн эш хаҡы буйынса минималь планка 7500 һум күләмендә билдәләнгән. Әлеге ваҡытта иҡтисадтың бюджеттан тыш секторы өсөн минималь хеҙмәт хаҡы - 6900, бюджет өсөн алты мең һум тәшкил итә.

*✓ Атайым кәңәштәрен иҫкә төшөргәндә, мин, мәҫәлән, бүренең кешегә ҡурҡыныс түгеллеген беләм. Кинола ғына бүре кешене аулап йөрөп ашай тип күрһәтәләр йәки ҡайҙалыр бер ерҙә һөжүм иткән, тип һөйләйҙәр.*



*ЯҢЫ РУБРИКА: "ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ"*

# ҠЫШҠЫ УРМАНДА АҘАШҺАҢ...

## нисек ҡотолорға беләһеңме?



**Бөгөн беҙ электрһыҙ, йылы һыуһыҙ, газһыҙ йәшәүҙең ни икәнен онотоп та барабыҙ инде. Бер нисә сәғәткә ут һүнһә лә ҡот оса. Телефон эшләмәһә лә донъянан айырылған кеүекһең. Ауырыһаң - табип, тешең һыҙлаһа - дантист, кейенәм тиһәң - стилист, стреска инһәң - психолог, техникаң боҙолһа - мастер, ҡайҙалыр барырға икән - такси хеҙмәттәре ҡул аҫтында булыуына ла өйрәнеп бөткәнбеҙ. Бына шундайбыҙ беҙ - замана кешеләре.**



Ә бына күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы: фантастик киноларҙағы кеүек, ҡапыл донъяла ут та һүнде, крандан һыу ҙа килмәй, аҙыҡ-түлек менән тулы магазиндар ҙа юҡҡа сыҡты, ти. Нисек итергә ул саҡта? Йә булмаһа, урманда аҙаштың, ти. Ни эшләйәсәк ундай хәлдә замана әҙәме? Эргә-тирә тәбиғәтен аңларлыҡ белеме ҡалғанмы унның? Беләме ҡайҙан һыу, ҡайҙан ризыҡ, ҡайҙан кейем табыу әмәлен? Ә һин, хөрмәтле гәзит уҡыусы, беләһеңме? Тәбиғәт менән күҙмә-күҙ ҡалғанда, унан ниндәй ярҙам өмөт итергә мөмкин икәнде башҡаларға өйрәтә алаһыңмы?

...Бәләкәй саҡта атайым, һунарға тип, өс-дүрт көнгә, ҡайһы саҡ аҙналап сығып китә торғайны. Ҡыш көндәре. Мин унның һырма кейем өҫтөнән аҡ япма менән ҡапланып, ҡалтағай саңғыларҙа урманға ҡарай киткәнен йыш ҡына күрә инем. Арҡаһындағы рюкзагында икмәк-сәй һәм тимер кәтүлүктән башҡа нәмә булмағанын да беләм. Тағы ҡушкөбәге бар. Һуңынан атайымдың сәй артында әсәйемә һөйләгәндәрен хәтерләйем: "Тәүлек йөрөгәс кенә шул-шул ерҙә маралдарҙың эҙенә төштөм... Эттәр өс-дүрт ҡуян быуып алды... Берәүһен бешереп ашаным... Тау һөҙәгендәге ҡарҙы өңөп оя яһап, ике этте аяҡ осона һалып йоҡланым... Өйөр башлығы уяу - һиҙҙе... Ике тәүлек эйәреп йөрөнөм... Атҡас, тунап, ҡулын-ҡулса, ботон-ботса тарттырып аҫтым (йәғни, аҙаҡ килеп алыу өсөн ағас ботаҡтарына мендереп элеп ҡуя)..."

Ниңә атайым ураған һайын марал ата икән, тип уйлай торғайным, ә ул ауылдаштарының заказын үтәгән икән: һыйыр итенә марал итен ҡушып ҡышлау урман халҡында әле лә бар. Унның шулай уҡ һеләүһен эҙенән йөрөгәнен ҡыҙыҡ итеп һөйләгәнен хәтерләйем. Айыуҙың ҡышҡа ҡайҙа ятырын күҙәтеп йөрөүен дә телгә алыр булды. Ауылдаш ағайҙар менән һөйләшкәнендә "Шунда-шунда һинең сабынлығыңдың шул тәңгәленә ятты" тип әйтә торғайны. Бик булмаһа, улар үҙҙәре килеп, "Ағай, сабынлығымда (диләнкәмдә) йәй буйы айыу йөрөнө, ҡышҡылыҡҡа ҡайһы тәңгәлгә ятты икән?" тип һорарҙар ине. Тимәк, халыҡ үҙе лә бәләгә тарымаҫ өсөн, тәбиғәт менән хәбәрҙар булырға ынтылған. Бөгөн иһә хатта ауылда ла халыҡ шул ҡәҙәре тәбиғәттән алыҫлашҡан, берәүҙәр, ана, айыу өңө алдында шау-шыулы байрам ойоштороп, саҡ иҫән ҡалғандар.

Теманан ситкә китмәйек, һүҙем - тәбиғәт шарттарында тереклек итеү ине. Мин бында атайымдың мылтыҡ менән генә ҡышҡы урманда йәшәй алыуын һөйләп киттем. Тик бындай кешеләр быуыны күптән үтте, бөгөн ауылдарҙа бүре атыр һунарсы ла таба алмайҙар. Мин, мәҫәлән, аҙыҡһыҙ ҡалып асыҡҡанда ниндәйҙер ағастың ҡайырыһын ашарға мөмкинлекте ишеткәнем бар, тик уны танымайым. Йоҡларға ҡалырға тура килгәндә ҡайҙа төн уҙғарырға, ағастарға йәки тауға ҡарап ҡайҙа - көньяҡҡамы, төньяҡҡамы китергә, ниндәй кейектән ҡурҡырға, ә ҡайһыныһын ашарға йәки уны нисек итеп ауларға икәнде, мәҫәлән, кем белә? Йәйге урманда аҙашҡанда ла нисек итеп шырпыһыҙ ут яғырға, һыу ятҡылығын нисек самалап табырға, ниндәй үләндәр, тамырҙар ашауға яраҡлы, ҡайһыларынан аяҡ һуҙырға икәнде беләһеңме? Йыуа ҡайҙа үҫә, һарынаны ниндәйерәк урындарҙан эҙләргә йәки аяҡ кейеме итеп нимәләрҙе ҡулланырға була?

Шул уҡ атайым кәңәштәрен иҫкә төшөргәндә, мин, мәҫәлән, бүренең кешегә ҡурҡыныс түгеллеген беләм. Кинола ғына бүре кешене аулап йөрөп ашай тип күрһәтәләр йәки ҡайҙалыр бер ерҙә һөжүм иткән, тип һөйләйҙәр. Ысынында мин уларҙы ҡышҡы урманда үҙем осратҡаным бар (шулай уҡ башҡа таныштарым, туғандарым да), улар тыныс ҡына үтеп китеү яғын ҡарай. Малға, әлбиттә, һөжүм итә, әммә кешегә бүре лә, айыу ҙа (балаһын ҡыҙғанып ҡына булмаһа) ас булған хәлдә лә теймәй. Айыу ниндәйҙер кимәлдә туҙынған-үкергән булып ҡурҡытып маташыр, тик боролоп киткәндә арттан эйәрмәйәсәк. Уларға ҡарағанда марал ҡурҡынысыраҡ, тиҙәр беҙҙә. Ата марал инәләрен ҡыҙғанып, һаҡлап, уйлап та тормаҫтан тапарға ынтылырға мөмкин. Шунлыҡтан, кемдән ҡурҡыныс барлығын да белеү кәрәк.

Әйткәндәй, был турала һөйләшеүҙе Бөрйән районы ағинәйҙәр ҡоронда күтәрҙеләр һәм гәзитебеҙҙә ошондай рубрика булдырыуҙы һоранылар. Нисек итеп көтөлмәгән шарттарҙа тереклек итергә һәм үҙеңде һаҡлап ҡалырға? Шулай итеп, яңы "Тереклек мәктәбе" рубрикаһына хаттар, комментарийҙар, шылтыратыуҙар көтәбеҙ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*УҠЫЙБЫҘ...*

# БЫЛ ИХТЫЯЖДЫ...

## китап йә гәзит кенә ҡандыра

**(Башы 1-се биттә).**

Күптән түгел Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" китабын уҡып сығып, шуның тәьҫирендә йөрөп алдым. Автор бында сихыр, шаманлыҡ, параллель донъя серҙәренә инергә ынтылыу темаһын күтәрә. Шау ғына беҙҙең әлеге тормош күренештәре. Әҫәрҙә изгелек һәм яуызлыҡ, аҡ һәм ҡара, мөхәббәт һәм нәфрәт темалары бер-береһенән айыра алмаҫлыҡ ептәр һәм сюжет һыҙығы менән бәйләнеп, үрелеп бара. Бәхеткә күрә, был ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы аҙаҡтан герой ҙа, уҡыусы ла айырырға өйрәнә кеүек. Күрәҙәселәр, ялған дауалаусылар күбәйгән әлеге заманда был китапты уҡып сығыу, бәлки, күптәрҙең күҙен асыр ине.

Гәзит-журналдарҙан "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәрен мотлаҡ ҡулға алам, "Шоңҡар" журналын яратам. Бигерәк тә "Киске Өфө"нөң башҡа гәзиттәрҙәге "шунда шул үтте" тигән форматтағы мәҡәләләргә нигеҙләнмәүе оҡшай. Бындағы яҙылғандарҙы бер аҙнанан, ике аҙнанан һуң уҡып та нимәләрҙер белергә, фәһем алырға була. Сөнки иҫкермәй торған мәңгелек темалар күтәрелә баҫмала.

Гәзиттә булдырылған "Заман башҡорто" тигән яңы рубрика үҙ милләтебеҙҙең аҫыл кешеләрен һүрәтләй. Мәҫәлән, "Балалар баҡсаһында, мәктәптә генә түгел, интернет аша ла өйрәнеп була туған телде" тигән яҙмаларҙан берлектәге Рәсәй-Америка компанияһында хеҙмәт итеүсе башҡорт егете Илдар Кинйәбулатов тураһында уҡып белдек, һоҡландыҡ. Бына, исмаһам, ысынлап та заман башҡорто!

"Динебеҙҙә-көнөбөҙ" рубрикаһы аҫтында донъя күргән мәҡәләләр ҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Хәҙер бит дини ағымдар күп, шуға ла дингә ылыҡҡан йәштәр ҡапыл ғына дөрөҫ йүнәлеш тапмаҫҡа ла мөмкиндәр. Ә бында белемле дин әһелдәренең яҙмалары, улар менән һөйләшеүҙәр баҫыла. Ул-был бәхәсле һорауҙарға ла яуап табырға мөмкин.

"Килешмәйем"дәге мәҡәләләрҙе иң тәүҙә уҡып сығам һәм, әлбиттә, улар менән мин дә килешмәйем. Гәзиттең шулай ҡыйыу фекер йөрөтә алыуына һоҡланам. Күҙгә төртмәй генә халыҡҡа оҡшамағанды өҫкә сығара белеү, йәғни һиңә ярамағандың башҡаларға ла яҡын түгеллеген белеү, шуларҙы яҙмала уҡыу барыбер ҙә ҡәнәғәтлек тойғоһо кисертә ул. Дөрөҫлөктөң, хаҡтың юғалып ҡалмаҫына ышаныс уята.

"Тарихнамә" битендә лә ысынлап ҡыҙыҡлы, ысынлап уҡығы килгәндәй мәғлүмәттәрҙе генә күрәм. Мәҫәлән, һуңғы һандарҙа ғалим М. Нәҙерғолов Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев тураһында бик мауыҡтырғыс тарих һөйләне. Быға саса беҙ М. Өмөтбаевты ошондай яҡын юҫыҡта белмәй ҙә инек бит. Барыбер ҙә уҡыусыны ҡоро мәғлүмәттәр генә түгел, ә кешеләрсә яҡынлыҡ ҡыҙыҡһындыра.

Баштағы фекеремә әйләнеп ҡайтҡанда, гәзит-журнал, китап уҡыу - ул шәхси мәҙәнилектең сағылышы икәнде лә онотоорға ярамай. Был мәҙәнилеккә кешене өйрәтеп, тәрбиәләп була. Әйҙәгеҙ, тәрбиәләнәйек.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓29 апрелдә Санкт-Петербургта Башҡорт мәҙәниәте көнө уҙғарыла. Башҡорт мәҙәниәте көнө Санкт-Петербургта башҡорттарҙың тәүге, рәсми теркәлгән йәмәғәт ойошмаларының юбилейына: "Ирәндек" башҡорт фольклор ансамбле ойошторолоуға 30 йыл тулыуға һәм "Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһының 20 йыллығына арналған. Сара Санкт-Петербургта Мосолман мәҙәниәте көндәрен байрам итеү сиктәрендә үткәрелә.

✓"СеверИнформ" мәғлүмәт-аналитика агентлығы эксперттары Рәсәй Үҙәк банкының 2016 йылдың 1 мартына ҡарата мәғлүмәттәрен тикшергән. Башҡортостан Рәсәй төбәктәрендә йәшәүселәрҙең кредит юллау рейтингында 39-сы баҫҡысты биләй. Республикала банктар физик берәмектәргә дөйөм суммаһы 271,99 миллиард һумлыҡ кредит биргән. Ағымдағы йылдың 1 мартына түләнмәгән бурыс күләме 26,63 миллиард һум тәшкил итә.

✓Ошо көндәрҙә баш ҡаланың муниципаль предприятиелары етәкселәренә газ яғыулығы менән эшләүсе 11 берәмек махсуслаштырылған техника - "КамАЗ" автомобилдәре тапшырылды. Был күп функциялы техника йылдың дүрт миҙгелендә лә эшләргә һәләтле. Машина асҡыстарын Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов тапшырҙы. Өфөлә газ яғыулығы ыңғай үҫешә. Былтыр Калинин һәм Орджоникидзе райондарында заманса заправкалау станциялары асылды. "Башавтотранс" баш ҡала маршруттарын хеҙмәтләндереү өсөн 30 яңы ҙур автобустар һатып алды. Шәхси автобустарында йөрөүселәр ҙә газ яғыулығына күсә.

✓1 майҙа Өфөлә, ғәҙәттәгесә, фонтандар эшләй башлай. Фонтандарҙы асыуға әҙерлек барышында ҡала хеҙмәттәре хеҙмәткәрҙәре уларҙың техник торошон тикшерә. Әле "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" хеҙмәткәрҙәре В.И. Ленин исемендәге парктың биләмәһен таҙарта. "Өфө ҡала яҡтылығы" хеҙмәткәрҙәре фонарҙарҙы тикшерә, бағаналарҙы буяй, янған лампочкаларҙы алмаштыра. Ғафури исемендәге паркта балалар өсөн аттракциондар тәртипкә килтерелгән, уларҙың хәүефһеҙлеген тикшереү тамамлана. Велосипедсылар өсөн өс саҡрымлыҡ махсус юл һалынған. "Ҡашҡаҙан" паркы биләмәһе сүп-сарҙан таҙартылған.

**“Башинформ”дан.**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ!

# БЕРЛӘШЕҮ ЮЛЫНДА

**Баш ҡалала 10-16 апрелдә "Төркиҙәр алтыны" йәштәр мәғариф форумы үтте. Был сараны Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамында Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Әхлаҡи һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау фонды ойошторҙо.**

"Төркиҙәр алтыны" йәштәр мәғариф форумы йәштәр мөхитендә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу, Рәсәй халыҡтары мәҙәниәттәрен үҙ-ара байытыу маҡсатында үткәрелде. Унда Рәсәйҙең ун ике төбәгенән һәм Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Әзербайджандан килгән ике йөҙ ҙә илленән ашыу йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, йәш белгестәр, студенттар ҡатнашты. Шулай уҡ форумға федераль власть органдары вәкилдәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, илдең алдынғы юғары уҡыу йорттары профессорҙары, кинорежиссерҙар һәм Рәсәй Фәндәр академияһы ғалимдары килде. Форумды асыу тантанаһында Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Магомедсалам Магомедов, илдә һәм республикала милли сәйәсәткә ҙур иғтибар бүленеүен билдәләп, былай тине: "Рәсәйҙә ике йөҙгә яҡын төрлө милләт вәкилдәре йәшәй, шуларҙың егерме туғыҙы төрки халыҡтар төркөмөнә ҡарай. Ошо көндәрҙә Өфөлә үткән форум Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеген тәьмин итеүгә, күрше илдәрҙәге йәштәр менән беҙҙең дуҫлыҡты нығытыуға булышлыҡ итер, тип ышаным".

Форумдың программаһына ярашлы, төрки халыҡтарының тарихы, мәҙәниәте, социаль-иҡтисади хәленә ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыу, яңы проекттар тәҡдим итеү төрлө майҙансыҡтарҙа ойошторолдо. Бынан тыш, йәштәр төрки халыҡтарының традицион кәсептәре буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә һәм экспертар берләшмәһе лидерҙары менән бәхәс ҡоронда ҡатнашты. Әйткәндәй, мәҙәниәткә ҡағылышлы бүлектең эше төрки халыҡтарҙың мәҙәниәте, тарихи ҡомартҡылары, традицион кәсептәре тураһында тупланған белемде популярлаштырыуға йүнәлтелгәйне. Унда йәштәрҙе Рәсәйҙең үҙенсәлекле тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау мәсьәләһенә ылыҡтырыу маҡсаты ла ҡаралды. Йәштәрҙе төрки халыҡтарының социаль-иҡтисади һәм мәҙәни үҫешенә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ылыҡтырыу "Төркиҙәр алтыны" йәштәр мәғариф форумының социаль проекттарға ҡағылышлы бүлегенең төп маҡсаты булып торҙо.

Форум еңеүселәренә Алтайға фольклор экспедицияһына барыу, Енеү көнөнә арнап Берлинда үткәрелгән әүҙем йәштәр конференцияһына һәм Бөтә Рәсәй милләт-ара конференцияла ҡатнашыу мөмкинлеге бирелде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТЫУЫМ КӘМЕЙ БАРА...

**Өфөләге "ВДНХ-Экспо" күргәҙмәләр комплексында "Башҡортостанда Һаулыҡ һаҡлау аҙналығы" медицина форумы сиктәрендә күргәҙмә эшләй башланы. Унда Рәсәйҙең 16 төбәгенән һәм Ҡаҙағстан Республикаһынан 120-нән ашыу компания ҡатнаша. Күргәҙмә барышында килеүселәр өсөн Сәләмәтлек үҙәктәрендә кардиологта, терапевта, стоматологта, эндокринологта, шулай уҡ күсмә медицина модулдәрендә маммологта һәм акушер-гинекологта бушлай медицина тикшереүе ойошторолған.**

Сараға Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов килде. Экспозицияны ҡараған саҡта республика Башлығы импортты алыштырыу, сериялы етештереүҙә инновациялы алымдар ҡулланыу, төбәктәр араһында үҙ-ара эш итеүҙе нығытыу мәсьәләләрен тикшерҙе һәм республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығына тейешле күрһәтмәләр бирҙе.

Рөстәм Зәки улы шулай уҡ медицина форумының пленар ултырышында сығыш яһаны. Республикалағы демографик хәл һаулыҡ һаҡлауҙың торошо хаҡында һөйләй, тип билдәләне республика Башлығы. "2015 йыл йомғаҡтары буйынса беҙ һаулыҡ һаҡлауға 53 миллиард һум аҡса бүлдек. Шуның менән бергә үлем күрһәткестәрен кәметә алмайбыҙ. Беҙ демография, халыҡ һанын арттырыу кәрәклеге хаҡында һөйләйбеҙ. Тыуым кәмей, үлем осраҡтары арта. Тағы ла бер-ике йылдан демографик үҫеш йәһәтенән артта ҡалған төбәктәр иҫәбендә буласаҡбыҙ, - тине төбәк етәксеһе. - Әммә был заманса йәмғиәт өсөн хурлыҡ, минең башҡа һүҙем юҡ".

Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, урбанизация процестары халыҡтың медицина хеҙмәттәре сифатына талаптарының артыуына килтерә. Бынан тыш, хәлде яҡшыртыу өсөн шарттар булдырылмаған. Медицина хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреүҙең дөйөм системаһы юҡ. Дауаханаларға һатып алынған ҡиммәтле ҡорамалдар белемле белгестәрҙең булмауы сәбәпле ҡулланылмай.

- Бер һүҙ менән әйткәндә, һорауҙар байтаҡ. Эш тә күп. Халыҡтың власҡа, һаулыҡ һаҡлау, кешеләрҙең йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеү системаларына ҡарата талаптары ла арта. Беҙ барыһын да күрәбеҙ, һәм йыш ҡына халыҡтың талаптарынан артта ҡалабыҙ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Әйҙәгеҙ, алға барайыҡ, уҡыйыҡ, заман талаптарына ярашлы эшләйек. Маҡсатыбыҙ бер - халыҡтың сәләмәтлеге.

# АЛЫШ ҒӘҘЕЛ БУЛҺЫН

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федераль Йыйылышының Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙа артабан ҡатнашыу өсөн партияның алдан тауыш биреүендә (праймериз) ҡатнашыуға документтарын тапшырған "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзалары һәм партияһыҙҙар менән осрашты.**

2015 йылдың аҙағында партияның башланғысы буйынса "Кандидат" махсус проекты эшләй башланы, тип хәбәр итте Рөстәм Хәмитов. Уның сиктәрендә праймеризда ҡатнашыусылар М. Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем ала. Улар менән политологтар, иҡтисадсылар, юристар, уҡытыусылар, психологтар эшләй.

- Теория мөһим, әлбиттә. Әммә ысын сәйәсмән өсөн практика ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға күрә дебаттар, һайлаусылар менән осрашыуҙар - һөнәри үҫештең иң яҡшы формаһы, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды республика етәксеһе. - Халыҡ менән аралашмайынса, бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Осрашыуҙарҙан ҡасырға, ҡурҡырға ярамай. Граждандар ғәҙел тәнҡитләй, ғәҙел һорауҙар бирә. Дөйөм алғанда, власҡа һәм партия вәкилдәренә мөнәсәбәт һәйбәт.

Төбәк етәксеһе партия проекттары, шул иҫәптән "Реаль эштәр", "Халыҡ контроле", "Тормош сифаты" һәм башҡалар идеяларҙы тормошҡа ашырыуҙың мөһим механизмдарының береһе булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Яҡын арала социаль яҡтан яҡланмаған кешеләр төркөмөнә ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән "Изгелек кәрзине" һәм төбәктә эске туризмды үҫтереү буйынса "Республиканы ас" проекттары башлана.

- Һөҙөмтәле эшләү өсөн төбәктә "Берҙәм Рәсәй"ҙең һәр кандидаты үҙенә ярҙам итәсәк кешеләрҙән торған команда тупларға тейеш. Улар урындарҙа, ваҡиғалар уртаһында буласаҡ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Был эшкә хәҙерҙән үк тотонорға кәрәк.

Алдан тауыш биреүҙә ҡатнашыу өсөн 108 кеше, шул иҫәптән 62 партия ағзаһы, алты партия яҡлылар һәм 40 партияһыҙҙар күрһәтелгән.

- Праймериз үткәс тә һеҙҙең арала иптәштәрсә мөнәсәбәттәрҙең һаҡланыуы мөһим. Аңлашыла, барыһы ла төп һайлауҙарға сыға алмаясаҡ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Хәҙер һеҙ берҙәм команда, "Берҙәм Рәсәй" партияһы вәкилдәре булараҡ сығыш яһайһығыҙ. Үҙ-ара ярышығыҙ, әммә был ярыш конфликтҡа алып килмәһен

# АРМИЯҒА КИТӘ ЕГЕТТӘР



**Был көндәрҙә егеттәребеҙ тыуған ерҙәрен ҡалдырып, сит тарафтарға хәрби бурысын үтәргә юллана.**

Яҙғы саҡырылыш оҙайлылығы элеккесә - 1 апрелдән 15 июлгә тиклем ҡаласаҡ. Саҡырыу ҡағыҙын тапшырыу яңы тәртип буйынса башҡарыласаҡ. Саҡырыу башланғандан алып ике аҙна эсендә егеттәр мотлаҡ рәүештә военкоматҡа килмәһә, уға иркенән мәхрүм итеү янай. Быйылдан башлап һәр саҡырылыусыға электрон карта тултырыла. Унда биографик мәғлүмәт, медицина күрһәткестәре, һөнәре яҙыла. Бындай алым, бер яҡтан, вазифаға тәғәйенләүҙе еңеләштерә, икенсе яҡтан, хеҙмәт тамамлағандан һуң да хәрби иҫәп алып барыу мөмкинлеге бирә.

Индерелгән яңылыҡтарҙың тағы бер ҡыҙыҡлы урыны бар: хәрби хеҙмәттән бер ниндәй хоҡуҡһыҙ ҡасып ҡалған кеше һуңынан муниципаль һәм дәүләт хеҙмәтендә вазифалы урында эшләй алмаясаҡ. Хеҙмәт ваҡыты үҙгәрешһеҙ - 12 ай ҡала.

"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы белдереүенсә, яҙғы саҡырылышта Башҡортостандан РФ Ҡораллы Көстәренә 5300 кеше, шул иҫәптән ҡоро ер ғәскәрҙәренә - 2900 самаһы, Хәрби-Һауа көстәренә - 360, Хәрби-Диңгеҙ флотына - 130, РВСН-ға - 320, ВДВ-ға - 120, эске ғәскәрҙәргә - 540 саҡырыласаҡ.

Ғаиләләр йәки ата-әсәләре пенсионер булыусылар мөмкинлектән сығып, яҡын-тирәлә хеҙмәт итәсәк. Шулай уҡ федераль ҡануниәткә ярашлы, хеҙмәткә саҡырылыусының законлы никахта булған ғаиләһенә ай һайын пособие түләнә. Хеҙмәткәрҙең ҡатыны йөкkә уҙып, ваҡыты 180 көн (26 аҙна) булғанда, бер тапҡыр 24 565 һум күләмендә пособие түләнә. Әгәр ғаиләлә өс йәшкә тиклем бала булғанда, ай һайын 10 528 һум түләнә. Уны алыу өсөн йәшәгән урын буйынса социаль яҡлау органына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Башҡортостан Рәсәйҙә хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар һаны буйынса лидерҙар рәтендә йөрөһә лә, былтыр 9000 кеше хәрби хеҙмәттән азат ителгән. Бында төп сәбәп булып егеттәрҙең сәләмәтлек торошонон хәрби хеҙмәт үтеүгә яраҡһыҙ булыуы тора. Тимәк, егеттәрҙең һаулығы тураһында ла етди хәстәрлек күрергә кәрәк. Әле хәрби хеҙмәтте контракт нигеҙендә ҡалдырыу тураһында һүҙҙәр йөрөй, әммә һау-сәләмәт ир-ат ҡалмаһа, илде кем һаҡлар?

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә инглиз телендә "Шүлгәнташ мәмерйәһендәге рәсемдәр һәм тамғалар" исемле китап баҫылып сыҡты. Баҫманың авторҙары - Юрий Ляхницкий, Олег Минников һәм Антон Юшко, инглиз теленә Зөһрә Рәхимова тәржемәләгән.

✔Республиканың алты районында яҙғы баҫыу эштәре башланды. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн Илеш, Мәләүез, Саҡмағош һәм Шишмә райондары аграрийҙары ужым культураларын туҡландыра. Бүздәк, Илеш, Мәләүез, Саҡмағош һәм Шаран райондарында күп йыллыҡ үләндәрҙе туҡландырыу, Мәләүездә иһә дым ҡаплатыу бара.

✔Апрель башында Өфөлә эш биреүселәрҙең әүҙемлеге артҡан. Эш тәҡдим итеүселәр һаны өс процентҡа күбәйгән. Медицинала һәм фармацевтикала һиҙелерлек үҫеш күҙәтелгән. Медицинала тәҡдимдәрҙең яртыһынан ашыуы табиптарға тура килә, терапевтарға ихтыяж ҙур. Вакансияларҙың 15 проценты - фармацевтарға, 13-ө шәфҡәт туташтарына йүнәлтелгән.

✔29 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Студент яҙы-2016" республика фестиваленең гала-концерты уҙа. Быйылғы "Студент яҙы" - иҫәп буйынса ҡырҡ алтынсыһы. Ул йәштәрҙең ижади башланғыстарын асыҡлау, эстетик тәрбиә биреү системаһын камиллаштырыу, һәләтле ижади йәштәргә ярҙам итеү маҡсатында үткәрелә. Былтыр октябрҙән апрелгә тиклем вуздар араһындағы этапта яҡынса 30 мең кеше ҡатнашты. Улар Башҡортостандың 17 уҡыу йорто һәм вуздарҙың 150 ижади коллективы.

✔"Оҫҡон" башҡорт видеоһы конкурсын ойоштороусылар йәнә иң яҡшы ролик авторҙарын эҙләй. Быйыл приз фонды күләме дүрт тапҡырға артты һәм 200 мең һум тәшкил итә. Бынан тыш, анимация, документаль фильмдар өсөн айырым номинациялар һәм 30 секундлыҡ микрокино булдырылған. Конкурсты ойоштороусы - Силәбе өлкәһендәге Башҡорт йәштәре союзы, Мәскәүҙәге һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы. Ғаризалар 2016 йылдың 30 ноябренә тиклем ҡабул ителә.

✓ *Бигерәк тә хеҙмәт юлын яңы ғына башлаған йәш педагогтарҙың төплө фекерләүе, үҙенсәлекле эш тәжрибәһен күрһәтә алыуы ҡыуандырҙы. Улар тәүге тапҡыр ойошторолған "Йәш уҡытыусы" конкурсында көс һынашты.*



*АФАРИН!*

# РӘСӘЙ БЕРЕНСЕЛЕГЕНӘ...

## Өфө уҡытыусыһы ла бара

**Өфөлә егерме алтынсы тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Быйыл конкурста республиканың төрлө төбәктәренән йәмғеһе 140 уҡытыусы һөнәри оҫталыҡтарын һынаны, шуларҙың ун бише - баш ҡала педагогтары. Асыҡ дәрестәр, класс сәғәттәре, оҫталыҡ дәрестәре, педагогик совет, мәғариф проекты кеүек һынауҙарҙан тыш, БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова ҡатнашлығында үткәрелгән түңәрәк ҡорҙағы фекер алышыу барышында ла һәр конкурсант үҙенең еңеүгә лайыҡ булыуын иҫбатларға тырышты. Бигерәк тә хеҙмәт юлын яңы ғына башлаған йәш педагогтарҙың төплө фекерләүе, үҙенсәлекле эш тәжрибәһен күрһәтә алыуы ҡыуандырҙы. Улар "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы сиктәрендә тәүге тапҡыр ойошторолған "Йәш уҡытыусы" конкурсында көс һынашты. Әйткәндәй, был ярышта ла Өфө педагогтары беренселекте бирмәне. Йәш педагогтар араһында баш ҡаланың 58-се лицейы физик культура уҡытыусыһы Сергей Шекунов еңеүсе тип табылды. Сергей Алексеевичтың хеҙмәт стажы ни бары өс йыл булыуға ҡарамаҫтан, күпкә тәжрибәле коллегаларынан һис ҡалышмауын иҫбат итте. Асыҡ дәрес барышында ул заманса спорт кәрәк-яраҡтары менән йыһазландырылмаған спорт залында физик культура дәресен үткәреү буйынса идеялары менән бүлеште. "Мин стандартһыҙ инвентарь ярҙамында физик культура дәресен юғары кимәлдә ойоштороу бурысын маҡсат итеп алғайным. Асыҡ дәрес ваҡытында уҡыусылар ябай ҡағыҙ, скотч ҡулланып, туп яһаны һәм кәрзин урынына ҙур ҡаптар ҡуйып, баскетбол уйнаны. Бына шулай, ҙур стадиондар, заманса йыһазландырылған спорт майҙансыҡтары булмаһа ла, балалар өсөн мауыҡтырғыс дәрес ойоштороп була", - тине йәш педагог.

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсында ҡатнашыусылар "Йөрәгемде балаларға бирәм", "Һөнәргә тоғролоҡ", "Педагогик оҫталыҡ", "Педагогик өмөт", "Мәғлүмәт-коммуникация технологияларын файҙалы ҡулланыу өсөн", "Башҡортостан халыҡтарының илһөйәрлек мираҫын һәм мәҙәни традицияларын һаҡлау" номинацияларында билдәләнде. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ булдырған В. Сухомлинский исемендәге миҙал Бөрө ҡалаһының 1-се урта мәктәбе физик культура уҡытыусыһы Алексей Ляпустинға тапшырылды. Билдәле булыуынса, "Башҡорт теле йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында Ишембай ҡалаһы З. Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханова еңгәйне. Ә бына "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2016" конкурсында Стәрлетамаҡ ҡалаһы 3-сө Башҡорт лицей-интернаты уҡытыусыһы Марат Йәмәлетдинов иң яҡшы педагог титулына лайыҡ булды. "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2016" конкурсында ла Стәрлетамаҡ ҡалаһының 31-се урта белем биреү мәктәбе педагогы Гөлшат Мансурова еңеүгә өлгәште. "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсының лауреаттары булыу хоҡуғын Дүртөйлө ҡалаһы Н. Нәжми исемендәге Башҡорт гимназияһының физика уҡытыусыһы Алексей Андрекус, Салауат ҡалаһы 2-се гимназияһы химия уҡытыусыһы Лия Искәндәрова, Өфө ҡалаһы 118-се мәктәбе биология һәм химия уҡытыусыһы Юлия Лобова, Стәрлетамаҡ ҡалаһы 1-се гимназияһы информатика уҡытыусыһы Наталья Носко алды.

**Шулай итеп, төбәктең иң яҡшы уҡытыусыһы тип Өфө ҡалаһының 159-сы мәктәбе тарих уҡытыусыһы Сергей Переверзев билдәләнде. Биш йыл хеҙмәт стажы булған йәш педагог "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы барышында юғары квалификациялы, алдынғы ҡарашлы, һәр яҡлап белемле оҫта булыуын күрһәтә алды. Ул киләһе йылда Рәсәй кимәлендәге конкурста республика уҡытыусылары исеменән сығыш яһаясаҡ.**



*ДОНЪЯ ШАУҠЫМЫ*




# УРАМҒА СЫҒЫУҘАР...

## түҙемлек бөтөүҙән бит

**Митинг, күп кеше ҡатнашлығында уҙған төрлө акция, баш күтәреү, забастовка һәм башҡа ошондай ризаһыҙлыҡ белдереүҙәр ағымдағы быуаттың иң күҙгә бәрелгән күренештәренең береһе булып тарихта ҡалыр, моғайын. Көн һайын тиерлек теге йәки был илдә алып барылған сәйәсәттән баш тартыуҙы талап итеп, хеҙмәт һәм эш урындарындағы ғәҙелһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе даулап, шулай уҡ башҡа төрлө сәбәптәрҙе юҡ итеүҙе күҙ уңында тотоп йәки кемделер яҡлап меңәрләгән кеше урамдарға сыға. Уҙған аҙнала ла был йәһәттән айырылманы.**

Мәҫәлән, Европаның өс илендә күп кеше ҡатнашлығындағы акциялар уҙҙы. Бөйөк Британия халҡы үҙенең премьер-министрын отставкаға ебәреүҙе, гректар илдәренә килеүсе ҡасаҡтар һанын ҡыҫҡартыуҙы, ә французлар иһә хеҙмәт ҡануниәтенә үҙгәрештәр индереүҙе тыйыуҙы талап итеп урамдарға ағылды.

Францияла, ғөмүмән, тынысһыҙ. Акциялар Ренн, Монпелье, Страсбург, йәмғеһе 200-ҙән ашыу, ҡалала үтә. Илдең баш ҡалаһы урамдары ысын мәғәнәһендә яу яланын хәтерләтә, тиһәң дә яҙыҡ булмаҫ. Протест белдереүселәр полиция хеҙмәткәрҙәренә таш һәм петарда бәрә, ә тегеләре уларға ҡаршы күҙҙән йәш ағыҙа торған газ ҡуллана. Ике яҡтан да ҡаза күреүселәр бихисап. Митингка сығыусылар хөкүмәттең аҙнала эш сәғәттәрен арттырыуҙы һәм яллап хеҙмәт итеүселәрҙе бер сәбәпһеҙ эштән бушатыу мөмкинлеге биргән үҙгәрештәр индерергә теләүенә ҡаршы сығыш яһай.

Бөйөк Британияла меңәрләгән кеше Дэвид Кэмиронды отставкаға ебәреүҙе талап итә. Митингта ҡатнашыусылар ваҡытлы матбуғатта уны коррупцияла ғәйепләп баҫылған мәҡәләләргә баҫым яһай. Шулай уҡ уның ҡасаҡтар менән алып барылған сәйәсәтенең уңышһыҙлыҡҡа дусар булыуы ла һәм илде, күптәр теләгәнсә, Евросоюз ағзалығынан сығыуҙы ойоштормауы ла күптәрҙең ҡанын ҡыҙҙыра. Ғөмүмән алғанда, Бөйөк Британия халҡы ил менән идара итеүселәрҙән һәм, атап әйткәндә, Дэвид Кэмирондан ялҡҡан икәнлеге аңлашылып тора.

Афинала иһә баш күтәреүселәр Евросоюз һәм Төркиә араһында ҡасаҡтарға ҡағылышлы килешеү менән риза түгелдәр. Протест белдереүселәр уны "кешелекһеҙ, мәғәнәһеҙ һәм законға ярашһыҙ", тип билдәләй. Гректарҙы аңларға була, сөнки Грецияға көн һайын меңәрләгән ҡасаҡ килә, ә илдән кире сығарылғандарҙың һаны күпкә әҙерәк. Ҡунаҡсыллыҡ, толерантлыҡ, әлбиттә, яҡшы, ләкин һәр кем үҙ өйөндә үҙен иркен тотҡоһо һәм яҡлаулы итеп тойғоһо килә. Ә ҡайһы бер ҡасаҡтарҙың ниндәй мәхшәр ойоштороуын иҫәпкә алғанда, был сараһыҙҙан ҡасаҡҡа әйләнеүселәрҙе ҡабул итеүселәргә тик кире яғы менән генә әйләнә.

Алда килтерелгән миҫалдар күп һанлы баш күтәреүҙәрҙең тик бер нисәүһе генә булды. Уларҙың һаны күпкә артығыраҡ икәне шикһеҙ, ләкин барыһы хаҡында ла мәғлүмәт киң матбуғат сараларында яҡтыртылмай. Ә шул уҡ ваҡытта былдай солғаныштарҙың бер-бер артлы теҙеп ҡуйылған һәм саҡ ҡына елдән дә йығылып китеүсе домино кеүек икәнен оноторға ярамай. Бер илдә тоҡанған ризаһыҙлыҡ уты башҡа илдәргә лә таралырға һәм бөтә донъяны ҡармап алырға мөмкин. Ни тиһәң дә, түҙемлектең дә сиге бар.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡолаҡ ауыртыуы

❖ Ҡолаҡҡа һыу ингәндә йәки башҡа сәбәп менән ҡолаҡ ауырта, шешеүе лә ихтимал. Уны былай дауалап була. Эмаль кәстрүлгә 1 стакан һыу, 5 лавр япрағы һалып, ҡайнау хәленә еткерергә лә, уттан алып, ҡалын итеп урап 2-3 сәғәт төнәтергә. Ауыртҡан ҡолаҡҡа 8-10 тамсы тамыҙырға һәм 2-3 ҡалаҡ эсергә. Көнөнә 2-3 мәртәбә ҡабатларға.

### Баланың эсе китһә...

❖ 1 балғалаҡ яҡшы сортлы дөгөгә 6-7 сынаяҡ һыу һалып, һәлмәк утта ҡайнатып алырға. Һыуытып, марля аша һөҙөргә. Ауырыу балаға ике сәғәт һайын сынаяҡтың 1/3 өлөшө күләмендә йылы көйө эсерергә.

### Күҙгә аҡ төшһә...

❖ 1 балғалаҡ иҙелгән һуғанға ярты стакан ҡайнар һөт өҫтәп, ныҡ итеп ябылған һауытта 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Шул дарыуҙы йылымыс көйө аҙнаһына 2 мәртәбә күҙгә 2-шәр тамсы тамыҙырға. Күҙҙә аҡ бөткәнсе эшләргә. Төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға.

### Хәтерҙе яҡшырта

❖ Көн һайын һарымһаҡ ашарға.

❖ Һарымһаҡ ҡандың шыйыҡлығын да тәьмин итә, ә шыйыҡ ҡан, тиҙ әйләнештә булғанлыҡтан, баш мейеһенә тиҙ барып етә һәм уны кислород менән туйындыра.

### Үпкә туберкулезы

❖ Яҙ-көҙ үпкә туберкулезы, ҡурылдай көсәйә. 100 грамм бал, 100 грамм аҡ май, ҡаҙ майы, какао һәм 15 грамм алоэ япраҡтарын бергә ҡушып, ҡайнап сыҡҡансы утта тоторға. 1 стакан ҡайнар һөткә берәр ҡалаҡ ҡушып, иртәле-кисле эсергә.

### Йүткереү

❖ Дарыуханала "Таблетки от кашля" тигән дарыу менән нашатыр-әнис тамсылары ("Грудной эликсир") һатып алығыҙ. Стаканда ике таблетканы иҙеп, уға десерт ҡалағы менән эликсир, 2 ҡалаҡ йылы һыу өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда һәм йоҡларға 2 сәғәт ҡалғас эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ ***Үҙ-ара ролдәрҙе ҡул күтәреп, "мин шул", "мин был", "мин Хәбир олатай" булып уйнайым тип бүлешә инек. Хәбир олатай, тимәк, балаларға ла абруй булғандыр инде.***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

**Ҡарға бутҡаһына ер-һыу кипкәс бөтә ауыл менән сығыр булғандар.**

Ҡарға бутҡаһына берәй хәллерәк кеше һарыҡ һуя. Тәүҙә затлыраҡ кейемдәрен кейеп, ауыл араһына бала-саға сыға. Улар сыр-сыу ҡаркылдайҙар:

*-Ҡар-р-р, ҡар-р-р,*
*Ҡарғатуйға бар-р, бар-р,*
*Ҡарғатуйға бармағандың*
*Күҙеле булыр тар-р, тар-р.*
*Ҡарғатуйға бармағандың*
*Уңышы уңыр тар-р, тар-р.*

Ауыл буйлап һөлгө йыйыла. Бирелгән бүләктәрҙе оҙон таяҡҡа бәйләй-бәйләй, өйҙән өйгә инеп йөрөйҙәр. Кем нимә бирә ала, шуны бирә.

Ҡарға туй (һәм һабантуй) алдынан өйҙән өйгә йөрөгәндә әйтелә торған һамаҡтар:

*Ҡорттар оҫон кейәнән,*
*Ҡолон тыуһын бейәнән.*
*Игендәре бик уңһын,*
*Ҡукәй кеүек туҡ булһын!*
*Әтәсегеҙ бик баҫтын,*
*Тауығығыҙ бик һалкын,*
*Кукәй, кукәй, таҫтамал,*
*Ҡулъяулыҡ, кулъяулыҡ!*

Шулай тип әйтемләп, оҙон таяҡҡа тәрлө нәмә йыйып йөрөгәндәр.

Ҡарға бутҡаһы йырҙары:

*Тирәктәрҙән үтә төшә*
*Яҙғы ҡояш нурҙары.*
*Ҡарға бутҡаһына сыҡкан*
*Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары.*
*Ҡарҡылдашып килегеҙ,*
*Һеҙгә бутҡа бирербеҙ.*
*Йомошобоҙ күп түгел -*
*Илгә уңыш бирегеҙ.*
*БыҒыр-быҒыр бутҡа бешкән,*
*Уртаһына аҡ май төшкән.*
*Уны алайым тигәнсе,*
*Биш бармағы ҡуша бешкән.*

Бутҡа бешеп, ашарға ултырғас:

- Һиңә түгел, ҡарғаға, - тип бер-береһенең ҡалаҡтарын, ҡашыҡтарын һуғып төшөрәләр.

*БыҒыр-быҒыр бутҡаһы,*
*Күпте йәшәр ҡортҡаһы.*
*Бутҡаһының майы юҡ -*
*Ашамаға йайы юҡ.*
*Ашамағыҙ бутҡаны,*
*Тапамағыҙ бутҡаны!*
*Бутҡа бешкән дан булып,*
*Хурламағыҙ ҡортканы! -*

Шулай тиҙәр ҙә:

*- Бутҡа һиңә түгел - ҡарғаға,*
*Ҡара ҡарға ашаһын,*
*Ала ҡарға ашаһын!*
*Ала ҡарға ашамаһа,*
*Ҡара ҡарға ашаһын!* - тип, йәнә бер-береһенең ҡалаҡ, ҡашыҡтарын һуғып төшөрәләр.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә ҡарғатуй үткәрәләр. Ҡар иреп, ер-һыу ҡороп, ағастар йәшәреп, йыуа сыҡҡас, ауылдың бер нисә ҡатыны йыйылып, күрше ауыл ҡатын-ҡыҙҙарын ҡунаҡҡа саҡырырға һөйләшә. Уларҙы йырлап-бейеп ҡаршы алалар. Саламай (майға быҡтырылған туҡмас) ашап, сәй эскәс, уйындар башлана. Уйын-көлкө, таҡмаҡ әйтешеү була. Ҡарғатуйҙа көрәш, йүгереш онотола, ҡайсаҡ ирмәк өсөн ирҙәр кейеме кейенеүселәр ҙә була, йә бер-береһенең кейемдәрен алмашлап кейәләр. Ҡарғатуйҙа бизрә ҡағып, бейешәләр.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ҠУШАМАТ"



# Ә МИН ҮҘЕМ ӘПИТҮК БУЛДЫМ...

**Бер көндө бала саҡ хәтирәләренә төшөп, апай-инәйҙәрем, ауылдаштарым тураһында иҫләп ултырҙым. Исемдәрҙе барлай торғас, ҡыҙыҡ ҡына бер күренеш иҫкә төштө: баҡтиһәң, һәр кемдең исеме менән йәнәш ниндәйҙер ҡушаматы ла бар икән.**

Минең үҙемде апайҙарым Әпитүк, Әпитүшкә тип йөрөттө. Был хаҡта мин шиғыр ҙа яҙғайным:

*"Әпитүшкә". Миңә апайҙарым*
*Бала саҡтан шулай өндәшә.*
*Иркәһең дә инде, ҡыҙый, тиеп,*
*Кемдер көлә, кемдер көнләшә.*
*Әпитүшкә тиеп һөйеп кенә,*
*Үсҡерҙеләр мине "әп" итеп,*
*Сәстәремә яуһын көмөш ямғыр -*
*Әпитүшкә булам, Әпитүк.*

Күрше-тирә инәйҙәрҙең дә беҙ ҡушкан "исемдәре" була торғайны. Хәйер, ул исемдәр әле лә йөрөй. Беҙҙән урамда бер нисә өй аша саҡ ҡына остараҡ йәшәгән Зәлифә инәйҙе "ағинәй" тип йөрөттөк. Һәр ваҡыт тиерлек аҡ яулыҡ ябынып йөрөгән ап-аҡ йөҙлө инәйҙең йорто ла "аҡ" ине. Яҙ етеү менән урам яғына ҡараған баҡсаһы шау алмағас сәскәһенә күмелер ине. Үҙе лә кешегә, бигерәк тә балаларға ҡарата йомшаҡ булды. Бер ҡасан да шуҡлыҡтарыбыҙ өсөн әрләп, бәҫ төшөрөп йөрөмәне, уны ололар ҙа, беҙ ҙә ихтирам иттек, шул ихтирам тигән төшөнсә уның алдында беҙҙе лә тыйнаҡ иткәндер, тип уйлайым хәҙер. Ағинәйҙең ысын исеме Зәлифә икәнен ҙурайғас ҡына белдем.

Күрше Гөлсинә әхирәтемде атаһы Бүләк олатай мәрхүм гел генә Гөлсинтәй тип йөрөттө. Ағалары ла шулай өндәште. Гөлсинәләрҙең күршеһендәге бәләкәс генә аҡ өйҙә сал сәсле, ҡартайыуҙанмы, баҫылыуҙанмы бер аҙ кәкрәйә төшкән әбей йәшәй торғайны. Гөлйәзәм булғандыр инде исеме, беҙ уны Гөлгөзәм ти торғайныҡ. Гөлгөзәм инәйебеҙ япа-яңғыҙ ине. Балалары булманы. Бабайы уны һаран булғаны өсөн айырған, ти торғайнылар. Тамаҡҡа ҡыҫмырыраҡ булған Гөлгөзәм инәй. Майҙы ла бармаҡ осона элеп, батмус ситенә яғып ҡына бирер булған ҡартына. Беҙ, балалар, уның һаранлығын тоймаҡыҡ былай. Ҡәртәсәйгә эйәреп барғанда кәнфит-мазар тоттороғанын да хәтерләмәйем. Иллә-мәгәр матур йәшәне, ике генә бөртөк гөл үҫтерҙе, икеһе лә ап-аҡ сәскә атҡан ярангөл ине.

Гөлсинәләрҙең ҡәртә артындағы өйҙә "Төтнәс" әбей йәшәне. Тәүҙә беҙ уны "Һөтнәс" икән тип уйлай торғайныҡ. Элек бит һәр кем шәхси хужалығындағы малдан хөкүмәткә һөт тапшырҙы, был инәй ҙә кис һайын һауындан һуң күнәкләп һөт алып килер ине. Беҙ уны "Һөтнәс" тигәс, Гөлсинәнең белдекле ҡиәфәт менән "Ул Һөтнәс түгел, ә Төтнәс", тип төҙәткәне әле булһа хәтерҙә. Урыҫ булһа ла, башҡортса һәйбәт аңлай ине. Улы Алеша ағай тап-таҙа һөйләшер ине башҡортса. "Төтнәс"өбеҙҙең ысын исеме тетя Нюся икәнен дә үҫә биргәс кенә белдек.

Беҙҙең урамдың аҫҡы яғында, йәғни, Һаҡмарға алып төшкән оста беҙҙең туған тейеш Маминәйебеҙ йәшәне. Шәмсиһан инәйҙе улдары "мам" тип өндәшкәс, беҙ ҙә уны Маминәй тигәнбеҙ. Ауылдың шул яҡ осонда тағы бер туған тейеш инәйебеҙ Күркинәй була торғайны. Ысын исеме - Рабиға. Нишләп Күркинәй тигәнбеҙҙер, һаман серенә төшөнә алмайым.

Ут күршелә йәшәгән инәйҙәр беҙ бала саҡта күсеп килде. Ейәнсәре Гөлназ беҙҙән саҡ ҡына кесерәк булһа ла, бергә уйнай торғайныҡ. Уның ҡәртәсәһе беҙҙең өсөн Күршинәй булды. Уның ысын исемен әле булһа белмәйем. Беҙҙең урамдың урта тирәһендә, идара ҡаршыһында, Һағыҙ әбей йәшәне. Ҡәртәсәйгә эйәреп һағыҙ алырға бара торғайныҡ ул инәйгә. Һағыҙ ҡайнатҡан көндәрен уның өй тирәһенән сыҡҡан төтөндән беләбеҙ. Май шикелле йомшаҡ була торғайны ул ҡайнатҡан ҡара һағыҙ.

Урамдағы барлыҡ инәйҙәрҙе барлап бөттөм икән тиһәм, Ҡара Зәйнәвинәй менән Һары Зәйнәвинәй тороп ҡала яҙған. Беҙҙең урамда ике Зәйнәп булғас, ҡушаматтары төҫтәренә ҡарап ҡушылғандыр инде. Ҡара Зәйнәвинәй шул тиклем зауыҡлы кеше булды. Магазинға ла шартына еткереп, матур күлдәген кейеп, көмөш беләҙектәрен, муйынса-алҡаларын, түшелдереген тағып, сағыу яулығын ябынып барыр ине.

Тағы ла бер ҡыҙыҡлы күренеш. Бала саҡта уҡытыусы, һатыусы, табип булып уйнарға ярата бит инде балалар. Беҙ ҙә йыш ҡына шул уйындарҙы уйнар инек. Тик беҙ "врач" булып түгел, ә "Хәбир олатай" булып уйнаныҡ. Үҙ-ара ролдәрҙе ҡул күтәреп, "мин шул", "мин был", "мин Хәбир олатай" булып уйнайым тип бүлешә инек. Хәбир олатай, тимәк, балаларға ла абруй булғандыр инде.

Хуртина тигән бер урыҫ әбейе лә йәшәй торғайны ауылда. Бик сәйер кеше ине ул. Кешеләр уны күрһә, урап ҡасты, балалар тыңлашмаһа ла, "Хуртинаға бирәм" тип ҡурҡытырҙар ине. Ниндәйерәк яҙмышлы әбей булғандыр, белмәйем, әммә ул кешенең юлын ҡыйып үтһә, юл унмай, тиҙәр ине. Юлды ла ул махсус "ҡыя", имеш. Хәйер, үҙем дә күргәнем булды бала саҡта. Таяғына таянып, нимәлер уҡынып, һин дә мин китеп барған ябай юлсының да юлынан йүгерә-атлай арҡыры ҡыйып үтер ине...

Кәшиф олатайымдың көтмәгән-уйламаған ерҙән нисек "Көшөлөк олатай" булып киткәненә үҙем шаһит булдым. Өләсәйҙәремдә йәйге ялда инем. Күрше ҡыҙҙар менән күлгә ныу инергә киттек. Әхирәтебеҙ Рәүфәнең иң бәләкәс һеңлеһе Нәзифәне лә эйәрттек. Кәшиф олатай беҙҙе ат менән килеп алырға тейеш ине. Күл йыраҡ ҡына, байтаҡ барҙыҡ. Арлыбирле күл ситендә ләмле һыуҙа сарпынған булдыҡ та, ҡайтырға әҙерләндек. Бәләкәй Нәзифә лә арыны, күп булһа, ике-өс йәш булғандыр уға. Ҡайтырға сыҡтыҡ. Кәшиф олатай, килеп алам, тигәс, көтәүелләп кенә атлайбыҙ, арытҡан да. Шунда Нәзифә асылыр-асылмаҫ теле менән: "Көшөлөк олатай һаман юҡсы..." - тип ҡуйҙы. Беҙ, ҙурыраҡ ҡыҙҙар, мәҙәк күреп, әй көлгән булабыҙ, күнелле булып китте, ҡайтып еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Көшөлөк олатай беҙҙе икенсе ерҙән әҙләп йөрөгән булып сыҡты...

Ҡәртәсәйҙең исеме Ғилмикамал, өләсәйҙеке - Ғәлиә, ҡартатайҙыҡы Әнүәр икәнен дә үҫкәс кенә белдем. Ҡәртәсәйҙе Дәззәй (мөғайын да, дәү әсәйҙән килә) тип йөрөттөк. Бынаһы иһә туғанлыҡ төшөнсәләренә иғтибар ҙа, ихтирам да тураһында һөйләйҙер. Кешене исемләп түгел, ә туғанлыҡ ептәре буйынса үҙ теүәллегендә атағанбыҙ, шунлыҡтан исемшәрифен дә белмәгәнбеҙ. Әлбиттә, үҫә төшкәс, исемдәрен дә белдек, шулай ҙа бала саҡтан нисек ғәҙәтләнгәнбеҙ, шулай өндәштек үҫҙәрәнә.

Исемен боҙоп әйтелгән ҡушаматтарҙан тыш, тотош ғаиләгә, тоҡомға ҡушылған ҡушаматтар ҙа була бит әле. Улары иһә ниндәйҙер тарихҡа бәйләнгән була икәнен дә беләбеҙ. Мөғайын, гәзит уҡыусылар араһынан кемгәләр был тема шулай уҡ ҡыҙыҡ тойолор һәм үҙендәге мәғлүмәттәрҙе яҙып ебәрер...

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

МАТУР ХӘТИРӘ

# КЕШЕНЕҢ ЙЫҺАНДЫ ЯУЛАУЫ



**Был ваҡиға күптән, бынан 55 йыл элек булды, әммә минең хәтерҙә ул кисә генә булған кеүек, һис күҙ алдымдан китмәй.**

Ул саҡтарҙа ай, ҡояш, йондоҙҙар, башҡа планеталар тураһында күп яҙалар, күп һөйләйҙәр ине. Ерҙең яһалма юлдашын осорған ваҡиға хәтеремдә, ул спутниктың "пип, пип, пип" тигән тауышы әле лә ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора. Ул ваҡытта ауылда электр ҙа, телевизор ҙа юҡ. Шулай ҙа беҙҙең

✓ *Беҙҙең йырсыбыҙ уларҙың барса эштәрен сағылдырҙы: нисек итеп үҙҙәренең иптәштәрен өгөтләүҙәре, нисек яуға инеүҙәре, дошмандарын ҡырыуҙары, алған яраларынан көсһөҙләнеп, йән биреүҙәре хаҡында йырланы ул.*



ХӘТЕРКИТАП



**Башҡортостандың гуманитар фәне арыу ғына өйрәнелеүгә ҡарамаҫтан, эшмәкәрлектәренә етерлек иғтибар бирелмәгән ғалимдарҙың исемдәре лә килеп сыға. Шундайҙарҙың береһе - тамырҙары Ырымбур губернаһының Күбәләк-Теләү олоҫо Ҡобағош ауылынан (хәҙерге Учалы районы) булған ғалим Мәжит Мәсәғүт улы Биләлов.**

# ТАҒЫ БЕР ИСЕМ,

## йәғни Мәжит Биләлов эшмәкәрлеге тураһында

Программала башҡорт тел ғилеме өлкәһендә аныҡ бурыстар билдәләнә һәм уларҙың күпселеге бөгөн дә үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған.

1928 йылда М.М. Биләлов Н.К. Дмитриев етәкселегендәге СССР Фәндәр академияһы Башҡорт экспедицияһының лингвистик-фольклор подотряды составында эшләй. Уның составына шулай уҡ О.И. Шацкая, З.Ш. Шакиров, Башҡортостанды өйрәнеү буйынса командировкаға ебәрелгән йәмғиәт ағзалары Ғ.Й. Дәүләтшин, С. Мирасов, шулай уҡ башҡа ғилми хеҙмәткәрҙәр Н.А. Цветинович, Н.Ф. Лебедев инә. Тикшеренеүҙәр өс йүнәлештә бара: 1. Уҫманғәле йүнәлеше; 2) Сермән йүнәлеше; 3) Тирлән йүнәлеше.

Подотрят бай диалектологик, лексик, шул иҫәптән "башҡорт диалекттарын планлы өйрәнеүҙең беренсе тәжрибәһе" булған күләме 20 баҫма биттән торған фразеологик материал йыя. Подотряд етәксеһе бигерәк тә М. Биләлов менән З. Шакировтың лексика һәм фразеология йыйыу буйынса эшен айырып билдәләй, сөнки улар "башҡорт теленең һүҙлек материалын документаль мәғлүмәттәр менән байыта, ә инде Преленың урынды һәм диалекттарҙы күрһәтмәгән иҫке һүҙлеге хәҙер бары тик тарихи ҡыҙыҡһыныу ғына уята".

Бер йылдан һуң М. Биләлов Н.К. Дмитриев етәкселегендә тағы ла СССР Фәндәр академияһының лингвистик-фольклор экспедицияһында ҡатнаша. Унда Закир Шакиров та булырға тейеш була, әммә Арғаяш кантонына шундай уҡ экспедиция менән сығыуы һөҙөмтәһендә, ҡатнаша алмай. Ул тикшерелгән районға бары тик сараның аҙағында ғына килеп ҡушыла. Иң тәүге план буйынса, Тамъян-Ҡатай һәм Йылайыр кантондарын тикшереү күҙаллана. Ләкин ваҡытында финанс бүленмәү һәм юлһыҙлыҡ арҡаһында бынан бер йыл алда тикшерелгән территорияға сиктәш булған Мәсәғүт кантоны тикшереү объектына әүерелә. Барлығы Ҡалмаҡҡол, Мырҙалар, Дыуан-Мәсетле, Балаҡатай, Әйле, Үрге-Ҡыйғы олоҫтарының 38 ауылы тикшерелә. Уның ҡыҫҡаса йомғаҡтары "Белем" башҡорт ғилми-педагогика журналында донъя күрә (1929, №10).

1928 йылғы лингвистик экспедиция материалдары Н.К. Дмитриев тарафынан 1932 йылда "Көнсығышты өйрәнеүселәр коллегияһы яҙмалары"-ның 5-се томында сыҡҡан "Башҡорт телмәрендәге варварлыҡтар" мәҡәләһендә файҙаланыла. Шул уҡ йылда "Совет фольклоры" (№2-3) мәҡәләләр һәм материалдар йыйынтығында М. Биләлов менән Н. Дмитриевтың берлектәге "Салауат тураһында башҡорт йырҙары" мәҡәләһе баҫыла. Сығанаҡ булып Мәсәғүт кантонында Көнбикә Зиннуровнан (Йонос ауылы), Ғилман Ғилфановтан (66 йәш, Торопкилде ауылы), Әкрәм Сәфиуллиндан (53 йәш, Яңы Юлдаш ауылы) һәм Абдулбасир Абдулбасировтан (80 йәш, Ибрай ауылы) яҙып алған дүрт йыр тора. Яҙып алғанда М. Биләлов Фәндәр академияһы баҫмаларында ҡулланылған транскрипцияны файҙалана. Тикшеренеүселәрҙең Салауат Юлаевтың тыуған ауылы Шағанайҙа булыуы ла иғтибарға лайыҡ. Әммә был уларҙың күңелен ҡайтара, сөнки "хатта батырҙың туранан-тура нәҫелдәре лә уның тураһында йырҙар белмәй". Ә йорт хужаһы бары тик Салауат Юлаевтың шәжәрәһен генә бирә.

Был эштәге сығанаҡтарҙың береһе Мәскәү профессоры А.Н. Максимованан алынған XIX быуат уртаһындағы ҡульяҙма. Документ Салауат тураһында йырҙарҙан башҡа, башҡорт фольклорының төп нөсхәлә һәм рус теленә тәржемә ителгән "Заятүләк", "Яманһары", "Таштуғай" кеүек халыҡ йырҙары; башҡорт йырҙарының ноталарын, Асылыкүл тураһындағы тарихты, В. Юматовтың "Чубимин олоҫо башҡорттары ерендәге боронғо һәйкәлдәр" хеҙмәтен, Ырымбур губернаһы мосолмандары тураһындағы яҙма мираҫын да үҙ эсенә ала.

Үкенескә күрә, М. Биләлов экспедициялар һөҙөмтәләренең ташҡа баҫылыуын күрә алмай: 1933 йылдың 11 декабрендә Верхнеуральскиҙа, ғүмеренең һуңғы минутына тиклем туған теленә һәм фәненә тоғрологон һәм ҡыҙыҡһыныуын юғалтмайынса, сихут сиренән вафат була. Уның үлеме менән башҡорт фәне ҙур юғалтыу кисерә. Шуныһы ла үкенесле - "Салауат Юлаев" энциклопедияһында М. Биләловтың эшмәкәрлеге сағылыш тапмаған. Ләкин, башҡорт теле грамматикаһы буйынса беренсе фундаменталь хеҙмәт авторы Н.К. Дмитриев һүҙҙәре менән әйткәндә, "уның исеме башҡорт лингвистикаһы тарихында һәләк була алмай, әммә компетентлы һәм эшлекле баһаны ысын китап авторы, үкенескә күрә, ишетмәйәсәк..."

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**(Аҙағы. Башы 15-се һанда).**

ҙур батарея менән көс алып эшләгән "Искра" тигән радиобыҙ бар ине. Ауыл халҡы радио-постановкаларҙы йә концерттарҙы көртә буйына йыйылып, көлөшә-көлөшә тыңлар, ҡушылып бейеп-йырлар ине.

1961 йылдың 12 апреле. Беҙҙең ауылдың башланғыс мәктәбендә дәрес бара. Илгә, ергә яҙ килә. Мин ул ваҡытта дүртенсе синыфта уҡый инем. Бына бер ваҡыт уҡытыусыбыҙ Фәйзулла ағай Түләшев, икенсе бүлмәнән уҡ шатлыҡлы ҡысҡырып, һөрән һалып, беҙ уҡыған бүлмәгә килеп инде:

- Кеше космосҡа осҡан, беҙҙең кеше, совет кешеһе - Юрий Гагарин!

Бер нәмә лә аңламаһаҡ та, уҡытыусыбыҙ шул тиклем шатланғас, был хәл ҙур шатлыҡтыр, тип, беҙ ҙә ура ҡысҡырып, бүлмә буйлап сабыша башланыҡ. Шатлығыбыҙ бүлмә эсенә генә һыймай, атылып урамға сыҡтыҡ. Шунан инде мәктәп ихатаһына ла һыймай, ауыл халҡының яратҡан урыны "Тау башы"на юл тоттоҡ. Бер ни ҙә ишетмәгән ауыл халҡы ла беҙҙең сафтарға ҡушылды. Әйткәндәй, беҙҙең "Тау башы" ауылыбыҙ барлыҡҡа килгәндән бирле бала-сағаның да, йәштәрҙең дә, хатта өлкәндәрҙең дә яратҡан урыны. Ауылдың бөтә байрамдары, йыйындары, уйындары шунда үтә. Сөнки унан ун бишләп саҡрым ары ятҡан Прибельск ҡасабаһы, Ҡарлыман тимер станцияһы, Һабаныш, Мағаш тауҙары ла күҙ алдында ғына кеүек күренеп ята. Ә Инйәр буйы тәбиғәте үҙе бер хозурлыҡ, үҙе бер мөғжизә.

Шулай итеп, әле ҡарҙан әрселеп бөтмәгән "Тау башы" был юлы ла байрам ҡиәфәте алды. Шунда уҡытыусы Фәйзулла ағай ауыл халҡына космос, космонавтика, планеталар, космос карабы, атмосфера һәм, әлбиттә, беренсе совет космонавы Юрий Гагарин тураһында һөйләп, аңлатып, телмәр тотто. Беҙ инде тағы ура ҡысҡырып, өйҙәргә таралыштыҡ. Ул көндө уҡыуҙар булманы, беренсе тапҡыр совет кешеһенең ракетала космосҡа күтәрелеүе ҙур шатлыҡҡа, оло байрамға әйләнгәйне. Ә унан инде Титов, Терешкова, Николаев һәм башҡалар күтәрелде йыһанға.

Бына быйыл ул ваҡиғаға илле биш йыл! Хәҙер инде космосҡа осоу район үҙәгенә барып килгән кеүек ҡабул ителә кеүек. Дөрөҫөн әйткәндә, күптәребеҙ нисә космонавтыбыҙ бар икәнен дә теүәл белмәйҙер. Рәсәйҙең, Рәсәй халҡының һәр дәүерҙә, һәр быуатта күрһәткән батырлыҡтары, үрләгән бейеклектәре биһисап. Ә бына 55 йыл элек тәүге тапҡыр кешенең космосты яулауы - ул мәң йылға бер була торған ваҡиға. Шуға ла Юрий Гагариндың һыны, йылмайыуы миллиондар күңелендә һаҡлана.

**Рауил ҒӘЛИН.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Олоҫҡа килеп етеүебеҙгә беҙҙе Төркмән старшина үҙ олоҫоноң иң күренекле башҡорттары менән ҡаршы алды; башҡорт ғәҙәтенсә, ихтирам белдереп, яныбыҙға килде һәм беҙҙең өсөн башҡорт мәжлесен үткәрергә ризалашыуыбыҙҙы һораны. Беҙ уның үтенесен бик теләп ҡабул иттек, сөнки ошо осраҡтан файҙаланып, башҡорттарҙың нисек күңел асыуын күрергә өмөтләндек.

Беҙҙең поход палаткабыҙ уларға мәжлес өсөн иң шәп урын булып тойолдо. Старшина һәм уның энеһе ике яҡтан беренсе урындарҙы алды; ҡалған башҡорттар, биләгән вазифаларына ҡарамайынса, ике яҡҡа ултырышты. Башҡорттарҙың иң күркәмдәрен беҙ ябай сивуха (самогон. - **Ред. иҫк.**) менән һыйланыҡ, уны беҙ улар өсөн алған инек. Әммә улар сивуха эсергә бик теләп барманы. Уны татып ҡарарға ла теләмәүселәр булды, башҡорттар унан ниндәйҙер тәм табыуҙы бөтөнләйгә белмәй ине. Башҡорттарҙа бал беренсе эсемлек булып иҫәпләнә, уның өселеге эсеп өйрәнмәгән кешенең ауыҙын бөрөштөрә; ә ул башҡорттарға шәкәрҙән дә тәмлерәк тойола. Сирек сәғәт тә үтмәне, улар мискәне бушатып та өлгөрҙө. Балдан һуң ҡымыҙға сират етте. Бында мәжлестә ҡатнашырға теләүсе һәр кем тирмәһенән бар булған ҡымыҙын алып килде; тиҙҙән беҙҙең палаткабыҙ башҡорт нектары тултырылған күн мискәләр һәм биҙрәләр менән тулды. Халыҡты һыйлау ике йәш башҡортҡа тапшырылды, уларҙың береһе ҡымыҙ ҡойһа, икенсеһе таратып биреп торҙо. Һыйлаған саҡта башҡорттар, бигерәк тә уларҙың күренеклеләре, инәлтеп ала, әммә кире ҡағыу оҙаҡҡа бармай, ә ҡымыҙ эсереүсегә ныҡыраҡ тырышырға тура килә: уға, аяҡ осонда торған көйө, бер ҡулы менән тусҡаҡты, икенсеһе менән эсеүсенең терһәген тотоп тороп, тусҡаҡты ҡулына алған башҡорттоң ауыҙына ҡымыҙҙы ҡойоп тигәндәй эсерергә тура килә.

Бал менән ҡушылған ҡымыҙ башҡорттарҙы шау-шыулыға әйләндерҙе. Улар үҙҙәрен иркенерәк һәм ҡыйыуыраҡ тота башланы, һәм ҡапыл һыбыҙғынан (ҡурай. - **Ред. иҫк.**) һәм варгандарҙан (ҡумыҙ. - **Ред. иҫк.**) торған башҡорт музыка хоры пәйҙә булды. Уларҙы йыйылыш уртаһына ултырттылар; бөтөн башҡорттар ҙа ошо төрлө тауышлы музыканы һоҡланып тыңланы; мәжлестәгеләрҙән икәү, танау аҫтынан мөлдәп, уға ҡушылды (күрәһең, автор өҙләү хаҡында шулай яҙа. - **Ред. иҫк.**): бында кем бер тында оҙағыраҡ мөлдәй ала, шуға өҫтөнлөк бирелә.

Башҡорттар, күренеүенсә, үҙҙәренең барса булған күңел асыу исулдарын күрһәтергә теләп, вокаль музыканы ла тәҡдим итте. Бында 60 йәштәр тирәһендәге ҡарт уларҙың иң яҡшы йырсыларынан һанала ине, һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙ ҙә уны тыңлауҙан ҡәнәғәтләнеү таптыҡ. Беҙгә уның имәндәй ҡаты тауышынан бигерәк, ым-хәрәкәттәре ныҡыраҡ оҡшаны. Ул үҙҙәре батыр тип атаған ата-бабаларының данлы эштәре хаҡында йырланы, улар араһында Алдар, Ҡара Һаҡал, Килмәт (дөрөҫө Килмәк. - **Ред. иҫк.**), Күсем һәм башҡалар беренсе булып иҫкә алынды (уҡый-яҙа белеүселәр аҙ булғанлыҡтан, башҡорттар ата-бабаларының тарихын йырҙарында һаҡлай). Беҙҙең йырсыбыҙ улар тормошоноң иң билдәле мәлдәре тураһында йырлау менән бергә, тауыш һәм ым-хәрәкәттәре аша уларҙың барса эштәрен сағылдырҙы: нисек итеп үҙҙәренең иптәштәрен өгөтләүҙәре, нисек яуға инеүҙәре, дошмандарын ҡырыуҙары, алған яраларынан көсһөҙләнеп, йән биреүҙәре хаҡында йырланы ул. Ҡарт быларҙың бөтөнөһөн дә шул тиклем йәнле итеп башҡарҙы, хатта мәжлестәгеләрҙең күбеһе илап ултырҙы.

**(Дауамы бар).**

# ЗАКОНДАР үҙгәрә, яңыра,

**Халыҡта "Ашаған белмәй, тураған белә" тигән киң мәғәнәгә эйә әйтем бар. Был әйтем закон сығарыусыларға туранан-тура ҡағыла торғандыр. Был йәһәттән социология фәндәре кандидаты, БР мәғариф отличнигы, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты, илебеҙ парламентының Конституцион закондар сығарыу һәм дәүләт төҙөлөшө комитеты ағзаһы Рөстәм Рифат улы ИШМӨХӘМӘТОВтың гәзит уҡыусыларға еткерер фекерҙәре бихисап.**

**▸ Рөстәм Рифат улы, беҙ, асылда, "янғын принцибы" буйынса йәшәйбеҙ. Самолет ҡолаһа ғына - авиацияны яҡшыртыу, корабль батһа ғына - һыу транспортын яйға һалыу, юл-транспорт ваҡиғаларында кешеләр күпләп һәләк булһа ғына был өлкәлә тәртип урынлаштырыу хаҡында ҡайғырта башлайбыҙ. Күп осраҡта гәҙәттән тыш ваҡиғалар булған тармаҡта закондарҙың ғәмәлдәге шарттарға тап килмәгәнен күрәбеҙ ҙә, закон сығарыусылар шулай уҡ "янғын принцибы" буйынса закондар ҡабул итергә тотона. Күпмеләр ваҡыттан һуң был закондарҙың ҡайһы берҙәренең ашығыс ҡабул ителгәне асыҡлана һәм закон сығарыусылар был мәсьәләгә киренән әйләнеп ҡайта, уларҙы төҙәтә, өҫтәмәләр индерә башлай. Әйткәндәй, бындай хәлдәр тормошобоҙҙоң һәр өлкәһенә тиерлек ҡағыла. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн закон сығарыусыларыбыҙ алдан уҡ ошондай хәлдәрҙе белеп, "янғын" сыҡмаҫ элек үк тейешле закондар ҡабул итә алмай һуң?**

- Әлбиттә, Дәүләт Думаһы закондарҙы күп ҡабул итә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, тормошта буласаҡ ваҡиғаларҙы алдан белеп, күреп тә булмайҙыр. Өсөнсө яҡтан, йәшәйешебеҙҙең динамикаһы бик көслө, үҙгәрештәр бик күп. Мәҫәлән, Ваҡыт машинаһына ултырып, 15 йылға үткәнгә барып, шунда йәшәгән кешеләргә: "2016 йылда икенсе балағыҙға ярты миллион самаһы аҡса аласаҡһығыҙ, өсөнсө балағыҙ тыуғандан һуң һеҙгә йорт һалыр өсөн буш ер биреләсәк, пенсионерҙар байрамдар алдынан бер аҙна элек пенсия аласаҡ", - тип әйтһәк, ышанмаҫтар ине.

Шул уҡ ваҡытта үткән быуаттың 90-сы йылдарында уҡытыусылар эш хаҡын кейем-һалым, араҡы, тәмәке менән алған ваҡытты ла иҫләйбеҙ. Шул ваҡытта беҙ уҡытыусыларға: "15 йылдан һеҙҙең эш хаҡығыҙ һаулыҡ һаҡлау тармағында эшләүселәр менән тигеҙ буласаҡ",- тип әйтһәк тә улар быға ышанмаҫ ине. Ул ваҡытта кешеләрҙә күңел төшөнкөлөгө булды. Уҡытыусыларҙың ҙур өлөшө, эштәрен ташлап, баҙарҙарға китеп, кейем-һалым, бушлай ваҡ-төйәк һатырға тотондо. Ул ваҡытта беҙ Ваҡыт машинаһына ултырып, 2016 йылға килеп, беҙҙе киләсәктә нимәләр көткәнен алдан белә алмай инек.

Беҙ яңыраҡ Дәүләт Думаһында "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса" кодекс ҡабул иттек. Мин дә мең ярым биттән торған был кодекстың авторҙарының береһемен. Ул кодекс 15 йыл элек индерелгән һәм шунсама йыл эшләй. Уға төрлө йылдарҙа төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индерелә килә, унда ҡайһы бер ҡапма-ҡаршылыҡлы положениелар барлыҡҡа килгән. Элек административ тәртип боҙоуҙарға ҡарата бер төрлө генә ҡараш булһа, яңы кодекста беҙ тәртип боҙоуҙарҙың ауыр һәм еңел төрҙәренә айырым мөнәсәбәт билдерҙек.

Педагог булараҡ, был өлкәгә ҡағылған фекерҙәремде әйтеп киткем килә. Мәҫәлән, әле ун беренсе класта уҡыған уҡыусыларҙың мәктәптә белем алған осоронда әллә нисәмә тапҡыр инновациялар булып үтте, ике тапҡыр дәреслектәре алмашынды. Шулай булғас, уларҙың башында ниндәй системалы белем булһын инде. Ә беҙ уларҙан Берҙәм дәүләт имтиханын юғары балға биреүҙе талап итәбеҙ.

Хәҙерге заманда йәшәйештең сифаты тиҙ үҙгәрә. Беҙ мәғлүмәт йәмғиәтендә йәшәйбеҙ. Төрлө яҡтан, ваҡытлы матбуғат, радио-телевидение, интернет аша негатив, позитив, нейтраль мәғлүмәт беҙҙең өҫкә ағылып ҡына тора. Элек улай түгел ине. Үкенескә күрә, негатив менән позитив мәғлүмәт буталған, күп кенә кешеләр ниндәй мәғлүмәтҡә ышанырға ла белмәй.

Тармаҡтарҙағы закондарға килгәндә, ул тәңгәлдә үҙгәрештәр артабан да булырға тейеш. Сөнки уларҙың һәр ҡайһыһына ҡараған норматив акттар совет дәүерендә үк ҡабул ителгән. Уларҙың күбеһен замандға ярашлы системаға һалырға кәрәк. Икенсе яҡтан килгәндә, хәҙерге ваҡытта һайлаусылар менән осрашыуҙар үткәргәндә һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, ауыл хужалығы өлкәләрендәге проблемаларға системалы ҡараш етмәгәне асыҡлана. Был районға бына былай, теге районға тегеләй эшләргә кәрәк, тигән фекер дөрөҫ түгел. Ҡыҫҡаһы, беҙгә закондарҙы системаға һалыу талап ителә.

**▸ Илебеҙ граждандарының йәшәү кимәле күтәрелһен, йәшәү шарттары яҡшырһын өсөн, иң беренсе сиратта, әлбиттә, камил закондар кәрәк. Был - бәхәсһеҙ. Икенсе яҡтан, беҙҙең йәмғәтселек был закондарҙы ҡабул итергә, шул закон буйынса йәшәргә әҙерме? Сағыштырыу өсөн бәләкәй генә бер миҫал. Әйтәйек, беҙ ҡала фатирында йәшәйбеҙ икән, ти. Фатирыбыҙға евроремонт эшләткәнбеҙ, унда сит илдән һатып алынған ҡиммәтле мебель ҡуйғанбыҙ, зауыҡ менән йыһазлағанбыҙ. Шул уҡ ваҡытта фатирыбыҙҙың ишеген асып, коридорға, подъезд алдына сығыу менән беҙҙе бөтөнләй башҡа төрлө донъя ҡаршылай. Күпселек осраҡта унда суп-сар, стеналарға ниндәй генә һүҙҙәр яҙылмаған, ҡыҫҡаһы, унда фатирыбыҙҙағы күренештең нәҡ киреһе күҙәтелә. Әгәр беҙҙең подъезд алды, коридор, ихата һәм урам - беҙҙең йәмғәтселегебеҙҙен, ижтимағи тормошобоҙҙоң көҙгөһө, сағылышы. Ҡабул ителгән закондар эшләп китһен өсөн ошо фатирҙа йәшәүсе кеше коридорында ла, подъезд алдында ла, ихатаурамда ла фатирындағы һымаҡ тәртип урынлаштырырға тейештер, тип уйланыла. Беҙ әлегә үҙебеҙҙең фатир эсен генә ҡарайбыҙ. Беҙҙең тормош кимәле түбән булыуы закондарҙың камил булмауынан килә тип уйлайһығыҙмы? Әллә йәмғәтселек быға әҙер түгелме?**

- Беҙ үҙебеҙ әҙер түгелбеҙҙер, тип уйлайым. Ауыл-ҡалалар буйлап осрашыуҙарҙа йөрөгәндә лә был ныҡ күренә. Беҙ идеологик стерженды юғалттыҡ. Бөтәбеҙҙе лә бергә тупларлыҡ идеябыҙ юҡ. Йәмғәтселекте күп фатирлы йорт менән сағыштырыу бик урынлы. Беҙҙең кешеләрҙә "Мин ошо йорттоң хужаһы, был минең подъезд, минең лифт, минең ихата", тигән аңлау юҡ. Беҙ һаман да үҙебеҙ йәшәгән йортҡа дөйөм ятаҡ итеп ҡарайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта кеше шәхси йорт төҙөп сыҡһа, унда ул үҙен хужа итеп тоя ала, тәртип тә һаҡлай. Совет осорондағы "Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе" тигән принцип индивидуаль яуаплылыҡ тойорға ҡамасаулай торғайны. Шул әле һаман дауам итә. Ҡала йорттарының подъездарына күҙ һалһаң, унда йәшәүсе кешеләр шул йортҡа ҡунаҡҡа ғына килгән һымаҡ тойола.

**▸ Был күренештәр барыһы ла йәш быуындың, мәктәп уҡыусыларының күҙ алдында. Ошоларға шаһит булыусы йәш кеше йәшәүҙең нормаһы шулай була икән, тип ҡабул итә һәм үҙе үҫеп еткәс, ололарҙың ҡылығын бермә-бер ҡабатлай...**

- Мәғариф системаһына килгәндә, беҙ тағы ла хеҙмәт тәрбиәһе төшөнсәһен бөтөнләй юғалттыҡ. Беҙ мәктәптә уҡығанда алмашлап дежур иттек, иҙән йыуҙыҡ, мәктәп, колхоз-баҡсаһында сөгөлдөр, картуф утаныҡ, диләнкәләрҙә йәш үҫентеләр ултыртып, уларҙы ҡарап үҫтерә торғайныҡ, уңыш йыйыу осоронда ырҙын табаҡтарына эшкә йөрөнөк. Мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙе янынан законға индерергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Бөгөн мәктәп директорҙары уҡыусыларҙы хатта субботниктарға сығара алмай. Ата-әсәләр ялыу менән хатта прокуратураға тиклем барып етә. Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙерге мәктәптә ялҡау егеттәр, ялҡау ҡыҙҙар үҫә, улар мәктәпте бөткәндә хатта иҙән дә йыуа белмәй. Улар шәкәр сөгөлдөрө менән малға ашата торған сөгөлдөрҙө айыра алмай. Әгәр ҙә закон нигеҙендә мәктәпкә хеҙмәт тәрбиәһен кире ҡайтарһаҡ, балалар тик тырышып эшләп кенә нимәләр өлгәшеп булғанын аңлап үҫер ине. Әрәмтамаҡлыҡты юҡ итер өсөн кәрәк мәктәпкә хеҙмәт тәрбиәһе.

**▸ Һеҙ илебеҙ халҡын берләштерә торған идея зарурлығы хаҡында әйттегеҙ. Рәсми ләғәттә ул милли идея тип атала. Владимир Путин бынан бер нисә йыл элек Рәсәй Федерацияһының милли идеяны итеп һәр йәһәттән дә конкурентлыҡҡа һәләтле булыуҙы атағайны. Һеҙҙенсә, беҙҙең милли идея нисек булырға тейеш?**

- Беренсенән, һәр бер милләттең үҙенең милли идеяны булырға тейеш. Бынан тыш, әйтәйек, Рәсәй Федерацияһына ҡараған субъекттарҙы, республикаларҙы берләштерерлек идеология булырға тейеш. Икенсенән, беҙ тик идеология менән генә булыша башлаһаҡ, ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығара башлайбыҙ. "Коллективлаштырыу", "нэптар", "бишйыллыҡтар", "ҡыуып етербеҙ, үтеп китербеҙ", һуңғылары - "үҙгәртеп ҡороу", "киң билдәлелек", "тиҙләнеш", "инновация", "модернизация" һ.б. шундай күренештәргә шаһитбыҙ. Ниндәйҙер идеология алға һөрөлә икән, лозунглар күтәрәбеҙ ҙә, барыһын да ватып емерә башлайбыҙ. Был идеялар барыһы ла ҡыҫҡа ғына ваҡытты үҙ эсенә алды. Улар 200-300 йылға иҫәп тотолманы. Японияны ҡараһаҡ, уларҙың идеологияһы алдағы мең йылға иҫәп тотоп уйланылған. Совет осоронда беҙҙең илдә планлы иҡтисад булды. Минеңсә, иҡтисадта ғына түгел, идеологияла ла планлы ҡараш булырға тейеш. Беҙ әле бар нәмәне үҙ ағымына ҡуйғанбыҙ. Беҙ күберәген балаларҙы, йәш быуынды тәрбиәләү хаҡында һүҙ алып барабыҙ, шул йүнәлештә эш итәбеҙ. Беҙгә бит өлкән һәм урта быуынды ла тәрбиәләргә һәм үҫтерергә кәрәк.

Беҙгә милли идеяны ғалимдарҙы, сәйәсмәндәрҙе, киң йәмғәтселек вә-



*Рәсәй Федерацияһына ҡараған субъекттарҙы, республикаларҙы берләштерерлек идеология булырға тейеш. Икенсенән, беҙ тик идеология менән генә булыша башлаһаҡ, ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығара башлайбыҙ. "Коллективлаштырыу", "нэптар", "бишйыллыҡтар", "ҡыуып етербеҙ, үтеп китербеҙ", һуңғылары - "үҙгәртеп ҡороу", "киң билдәлелек", "тиҙләнеш", "инновация", "модернизация" һ.б. шундай күренештәргә шаһитбыҙ. Ниндәйҙер идеология алға һөрөлә икән, лозунглар күтәрәбеҙ ҙә, барыһын да ватып емерә башлайбыҙ. Был идеялар барыһы ла ҡыҫҡа ғына ваҡытты үҙ эсенә алды. Улар 200-300 йылға иҫәп тотолманы. Японияны ҡараһаҡ, уларҙың идеологияһы алдағы мең йылға иҫәп тотоп уйланылған. Совет осоронда беҙҙең илдә планлы иҡтисад булды. Минеңсә, иҡтисадта ғына түгел, идеологияла ла планлы ҡараш булырға тейеш.*

***✓ Контроль ойошмалары һуңғы ун-ун биш йыл эсендә, ысынлап та, шул тиклем күбәйҙе. Ғафури районында бер мәктәп директоры бер йыл эсендә 18 тапҡыр тикшереүселәр килеүе хаҡында әйтте.***

# ТОРМОШ КЕҮЕК:

## төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индерелә...

килдәрен саҡырып, берлектәге ҡарар нигеҙендә билдәләргә кәрәктер. Владимир Путин патриотлыҡты милли идея итеп тәҡдим иткәйне бер саҡ. Ҡайһы бер сит илдәрҙә патриотлыҡ тигән төшөнсә бар, әммә уларҙың мәғәнәһе беҙҙекенән бөтөнләй айырыла. Улар был төшөнсәне бик тар мәғәнәлә аңлай һәм ул төшөнсә уларҙа аныҡ объектҡа йүнәлтелгән. Беҙҙең илдәге патриотлыҡ абстракт төшөнсә: тыуған иленә, халҡына, тыуған районына, ҡалаҡа һ.б. Әгәр ҙә мин мәғариф системаһында эшләйем икән, мин мәғариф системаһының патриоты булырға тейешмен, тыуған ауылымдың, халҡымдың патриоты ла булырға тейешмен.

**▸ Инглиз социологы Бенедикт Андерсендың шундай ҡыҙыҡлы бер теорияһы бар: "Күҙ алдына килтерелгән берләшмәләр" ("Воображаемые сообщества") тип атала. Ғалим был хеҙмәтендә халыҡ, милләт төшөнсәһен инҡар итеп, уларҙы айырым төркөм кешеләрҙең ниндәйҙер берләшмәне (халыҡты, милләтте) күҙ алдына килтереүе тип кенә баһалай. Әлбиттә, бында Андерсен менән килешеп булмай. Сөнки, айырым төркөм кешеләрҙең (халыҡтың, милләттең) ниндәйҙер бер телдә аралашыуын, үҙҙәренә генә хас йолалар башҡарыуын, тарихи факторҙы ул инҡар итә. Ҡыҫҡаһы, ул халыҡты, милләтте уйлап сығарылған төшөнсә тип ҡарай. Бында уның ниндәй идеологияға хеҙмәт иткәне беленеп тора. Ни өсөн тигәндә, АҠШ-та барлыҡ граждандар "американлылар" тип атала, шул уҡ ваҡытта был дәүләтте барлыҡҡа килтереүсе европалыларҙың - инглиздәрҙең, француздарҙың, португалдарҙың һәр ҡайһыһының милләтен һаҡлаусы дәүләттәре бар. Тимәк, беҙ һуҡыр рәүештә АҠШ модулен үҙебеҙгә күсерә алмайбыҙ. Рәсәй Президенты үҙенең сығыштарында был һүҙбәйләнеште бик йыш ҡабатлай: "Рәсәй - күп милләтле, күп динле дәүләт..."**

- Был мәсьәләгә ике яҡлап ҡарарға була. Беренсенән, ысынлап та, күҙ алдына килтергән партнер менән аралашыу барҙыр ул. Һәр кем үҙен ниндәйҙер төркөмдә булыуын тоя. Беҙ әгәр ҙә социаль селтәрҙәргә инһәк, үҙебеҙҙе төрлө социаль төркөмдәргә ҡуша алабыҙ. Ул төркөм "Һыра яратыусылар төркөмө" йә булмаһа "Ҡоштарҙың дуҫтары" тип аталһа ла, ул социаль төркөм тип атала. Был төркөмгә ҡараусылар бер-береһен күреп белмәһә лә, үҙҙәрен шул төркөмдә итеп тоя, улар, йәнәһе, бергә, шул төркөм эсендә. Икенсенән, ғалимдар төрлө милләткә ҡараған кешеләрҙең айырым гаплатөркөмгә ҡарауын иҫбат итте. Мәҫәлән, башҡорттарҙың күпселегенең ҡаны R1b гаплатөркөмөнә ҡарауы уларҙың, Европаның һирәк халыҡтарында осрағанса, боронғо халыҡ икәнлеген иҫбатлай. Тимәк, был Андерсен әйтмешләй, "күҙ алдына килтерелгән берләшмә" түгел. Ҡан аңды ла, менталитетты ла билдәләй.

**▸ Эшҡыуарлыҡ хаҡында һүҙ алып барғанда, мин Рәсәй радиоһы аша сығыш яһаусы бер иҡтисадсының фекерен килтереүҙе урынлы табам. Уның әйтеүенсә, беҙҙең илдә иҡтисадты үҫтереү аквариумда пиранья менән табан балығын бергә үрсетеп маташыуға тиң. Пиранья тигәндә, беҙ бында һалым инспекцияһынан алып санэпидстанцияға тиклемге утыҙға яҡын дәүләт контроль органдарын күҙ уңында тотабыҙ. Үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар: ауылдарҙа егеттәр ҙур дәрт менән шәхси предприятиелар асып, теркәлеп, эш башларға ла өлгөрмәйҙәр, йә тикшереүселәр, йә квитанциялар килә башлай. Нисек инде, эш башлаусы әле еренә игенен сәсеп тә өлгөрмәй, ҡалын-ҡалын суммаларҙы түләргә тейешме ни? Егеттәр тегеләй-былай итә лә, асҡан эшен ябып, йә ҡалаға шабашкаға, йә Себергә сығып китә. Миненсә, бында контроль ойошмаларҙың хоҡуғын сикләй йә кәметә торған закондар кәрәктер...**

- Ысынлап та, шәхси эшҡыуарҙар әлеге ваҡытта бик ауыр осор кисерә. Был ауырлыҡ иң беренсе сиратта илдә, донъяла барған финанс көрсөгөнә бәйле. Икенсе яҡтан, һеҙ әйткән аквариумдағы һыу - хоҡуҡ мөхите. Башта әйтеп үткән административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы закондың элекке редакцияһында законды боҙған юридик шәхестәр өсөн дә, шәхси эшҡыуарҙар өсөн дә бер үк кимәлдә штраф түләү ҡарала ине. Әйтәйек, ҙур предприятие өсөн 200 мең һум штраф тингә лә тормай, ә шәхси эшҡыуар өсөн 200 мең һум штраф банкротлыҡҡа тиң. Шундай хәлдәр булмаһын өсөн беҙ категорияларға бүлеп, градациялар эшләнек.

Һеҙ әйткән дәүләттең контроль ойошмалары һуңғы ун-ун биш йыл эсендә, ысынлап та, шул тиклем күбәйҙе. Улар эшҡыуарҙарға ғына түгел, мәктәптәргә, балалар баҡсаларына тынғылыҡ бирмәй. Ғафури районында бер мәктәп директоры бер йыл эсендә 18 тапҡыр тикшереүселәр килеүе хаҡында әйтте. Шунан һуң беҙ уларҙан Берҙәм дәүләт имтиханында юғары сифат талап итәбеҙ. Шунсама тикшереүҙәрҙе ҡабул иткәндән һуң, директорҙың уҡыу сифатын тәьмин итергә ҡайҙан ваҡыты булһын? Уҡытыусылар ҙа туҡтауһыҙ отчет тултырыу менән була. Беҙгә был йәһәттән, һис шикһеҙ, закондарҙы ябайлаштырыу фарыз.

**▸ Миңә лә бер районда тикшереүселәрҙең туҡтауһыҙ килеүенән миктәгән мәктәп директорының зарын ишетергә тура килде. Уларҙан бер нисек тә штраф түләтә алмаған контроль ойошма вәкиле директорға шулай тип әйтергә мәжбүр булған: "Элек районда колхоз-совхоздар, башҡа предприятиелар эшләгән саҡта штраф түләүселәр күп ине. Хәҙер ауылдарҙа беҙгә штраф түләй алырлыҡ берҙән-бер урын мәктәп ҡалды. Беҙ ҙә бит нимәгәлер йәшәргә тейеш..." Әлбиттә, был һүҙҙәр аҫтында бигүк күңелле булмаған уйҙарға һалыусы ысынбарлыҡ ята...**
**Тағы ла бер мөһим мәсьәләгә туҡталып үтке килә. Сит ил сәйәсмәндәре, Рәсәй капитализмға булдыҡһыҙ, тип иҫәпләй. Йәнәһе, беҙҙә йә абсолют монархия, йә Ҡытайҙағы һымаҡ көйләнеүсе социализм ғына булыуы мөмкин. Һәр хәлдә, социаль гарантиялы иҡтисадтың ғына киләсәге булыуы мөмкиндер, тигән фекергә киләбеҙ. Һеҙ был йәһәттән нисек уйлайһығыҙ?**

- Беҙ доллар курсы ҡасан күпме, нефтҡә хаҡ ҡасан күпме булыры хаҡында әйтә алабыҙмы? Юҡ. Беҙҙең кәмендә биш йылға планыбыҙ булырға тейеш. Өс йыллыҡ бюджет ҡабул иткәндә ундай ынтылышыбыҙ бар ине, әммә иҡтисади көрсөк үҙ шарттарын алға һөрҙө. Беҙгә "таҙа" капитализм тап килмәй. Илебеҙ ҙур, федерация эсендә төрлө субъекттар күп, һәр субъект климат, юл, һыу, тәбиғәт һәм ер аҫты байлыҡтары буйынса айырым үҙенсәлектәргә эйә. Шуға күрә беҙгә федерация кимәлендә барыбер ҙә яңыса планлы иҡтисад талап ителә. Беҙ бер йылға бюджет ҡабул итәбеҙ, аҙаҡтан уны бер урында ҡыҫабыҙ ҙа, икенсе урынға күберәк бирәбеҙ. Беҙҙең иҡтисадты социалистик тип тә, капиталистик тип тә атап булмай. Беҙҙең иҡтисадҡа ҡатнаш тип хас.

**▸ Юл хәүефһеҙлеге хәрәкәте тармағында ҡулланылған закондар ҡәтғиләшеп, штрафтар суммаһы артҡан һайын ришүәттең дә суммаһы арта, тиҙәр. Был күп һанлы водителдәрҙең фекере...**

- Коррупция менән төрлө кимәлдә көрәшәбеҙ: субъект һәм федерация кимәлендә. Әммә мин бында ришүәт алыуҙан бигерәк ришүәт биреүҙе проблема итеп ҡуйыр инем. Ришүәт биреүсе булмаһа, уны алыусылар ҙа булмаҫ ине. Шуға күрә, ришүәт хаҡы арта, тигән фекер төптө дөрөҫ түгел. Етмәһә, хәҙер бар урындарҙа ла видеотеркәгестәр ҡуйылған. Һин ҡала башлығымы, депутатмы, әллә ябай эшсеме - "бәхет хаты" барыбыҙға ла килә. Әйткәндәй, 2016 йылдың 1 ғинуарынан юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыларға һалынған штрафтың яртыһын ғына түләү мөмкинлегенә ҡағылышлы закон проектын да мин индерҙем.

**▸ Мәктәптәрҙә барған оптималләштереү хаҡында төрлөсә яҙалар. Уның ыңғай яҡтарын да, кире яҡтарын да табалар. Элек колхоз-совхоздар ауылды тотоп тора ине, хәҙер мәктәп бөтһә, ауыл да бөтәсәк, тиҙәр. Мәктәпте һаҡлап ҡалыр өсөн ауылда балаларҙың күпләп тыуыуы, бының өсөн унда йәштәрҙең күпләп йәшәүе һәм улар өсөн эш урындары булдырыу фарыз. Икенсенән, психологияла шәхестең шундай аңлатмаһы бар: "Шәхес - ул шәхес-ара мөнәсәбәттәр ансамбле". Тимәк, коллектив тулы булмаһа, шәхес тә үҫешә алмай. Был тулы булмаған комплектлы мәктәптәрҙең һөҙөмтәле эшләренә шик төшөрә. Шулай түгелме?**

- Һеҙ, журналист булараҡ, мине психологик яҡтан алдан әҙерләп, "оптималләштереү кәрәк", тигән фекерҙе көсләп таҡтығыҙ. Бөгөн дәүләт кимәлендә лә шул уҡ хәл күҙәтелә. Бәләкәй ауылдағы тулы булмаған комплектлы мәктәптә уҡытыуҙың сифаты түбән, шуға күрә ул мәктәпте ябып, балаларҙы ҙурыраҡ ауылға уҡытырға йөрөтөргә кәрәк, тибеҙ. Ә кем бында фәнни тикшереү үткәреп, мәктәптең һөҙөмтәһеҙ булыуын иҫбат иткәне бар икән? Мин бында, киреһенсә, өс-дүрт бала уҡыған класта индивидуаль белем биреүҙең өҫтөнлөгөн күрәм. Ниңә беҙ ошондай кластағы өс-дүрт баланың һәр ҡайһыһына айырым иғтибар, юғары талап булғанлығын аңламайбыҙ? Бындай класта уҡыусы бала кемдәндер күсерә, башҡа берәүгә һалыша алмай, уға һәр дәрес һайын әллә нисәмә тапҡыр яуап бирергә тура килә. Был уҡыусының үҙаллылығын үҫтерергә булышлыҡ итеүсе идеаль шарт. Әйҙәгеҙ, тулы булмаған комплектлы кластағы балаларҙың белем сифаты менән тулы комплектлы кластағы балаларҙың белем сифатын билдәләр өсөн тест үткәреп ҡарайыҡ. Ундай тикшереүҙе бер кем дә үткәрмәне, оптималләштереүҙе сифатҡа түгел, аҡсаға бәйле үткәрҙеләр, мәктәпкә бухгалтерия аша ҡаранылар. Был дөрөҫ түгел.

Ни өсөн мәктәпкә Берҙәм дәүләт имтиханын индерҙеләр? Беренсенән, юғары уҡыу йорттарындағы коррупцияға ҡаршы көрәшеү өсөн, икенсенән, белем биреүҙә сифатҡа өлгәшер өсөн. Оптималләштереү алдынан РФ Мәғариф министрлығы шундай уҡ фәнни-тикшеренеү үткәрергә тейеш ине. Бер үк ваҡытта ауылдарҙа күп һандағы медицина пункттарын, участка дауаханаларын яптылар. Уларҙа ла тикшереү үткәреп, ниңә ябыла икәнен нигеҙләүсе булманы. Ул ауылда нисә һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, нисә ауырыу кеше, нисә бала йәшәүе лә иҫәпкә алынманы.

**▸ Берҙәм дәүләт имтиханы мәктәптәрҙә тәрбиә мәсьәләһен икенсе урынға ҡуйҙы. Мәктәптәрҙә ата-әсәләр, уҡытыусылар, уҡыусылар үҙҙәре ун бер йыл буйына Берҙәм дәүләт имтиханындағы һөҙөмтә хаҡында уйланып, тик шуға әҙерләнеп кенә йөрөгән һымаҡ. Был бик етди симптом. Һөйләүҙәренсә, имеш, БДИ-ны уйлап сығарыусы кеше быны ғүмеренең иң ҙур хатаһы тип иҫәпләй икән. Һеҙҙең Берҙәм дәүләт имтиханына мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Мин был һорауға яуапты ҡасандыр мәктәптә эшләгән уҡытыусы булараҡ биргем килә. Мин Берҙәм дәүләт имтиханын асыҡтан-асыҡ уҡытыусыға ышанмау тип ҡабул иттем. Сөнки уға тиклем имтихандарҙы үҙем ҡабул итә инем. Хәҙер дәүләт балаларҙы түгел, мине тикшерә булып сыға. Сөнки хәҙер беҙҙә БДИ һөҙөмтәһен губернатор, район хакимиәте башлығы эше һөҙөмтәһе критерийы итеп индерҙеләр. БДИ - мәктәптә белем алыуҙың бөтә осоро һөҙөмтәһе. Ниңә ул губернаторға йә район хакимиәте башлығына бәйле булырға тейеш һуң? 11 йыл эсендә генә нисә губернатор, нисә хакимиәт башлығы алмашынып өлгөрә. Ә ошо ваҡыт эсендә нисә тапҡыр уҡытыусы, нисә тапҡыр дәреслектәр, уҡыу программаһы, уҡытыу системаһы алмашына. Ниндәйҙер мәктәптә БДИ һөҙөмтәләре насар булһа, бының өсөн уҡытыусылар яуап бирә. Әммә бында уларҙың ғәйебе юҡ.

Ә ата-әсә булараҡ, ысынлап та, Берҙәм дәүләт имтиханы белем биреүҙе контролдә тотоу өсөн кәрәк тип иҫәпләйем. Тик БДИ-ны артабан камиллаштырыу фарыз. Был имтихандан ата-әсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа, уҡыусылар ҙа риза булырға тейеш. БДИ-ның тағы бер ыңғай яғы: уның һөҙөмтәләре буйынса хатта төпкөл ауылдарҙа йәшәүсе балаларҙың туранан-тура, имтиханһыҙ Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәшәйешебеҙҙең тотороҡлоғон тәьмин итер өсөн кәрәк закондар камиллығы. Ошо юлда йөрөүсе яҡташыбыҙға еңел булмаған был хеҙмәтендә рух ныҡлығы, зиһен үткерлеге теләргә генә ҡала.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Аҡсабый ҡанбаба үçмерҙең йыуаш ҡына баланан ажарланып, харап үсле бей булмаҡсы һыҙатына баш сайҡап ҡуйҙы. Килер бер көн, олатаһының "Аҡсабыйҙы тыңла" тигән нәсихәтен дә онотасаҡ был егет.*





# ҺЫРТТАН КИЛГӘН ИКЕ ҺЫН

Рәйлә САБИТОВА

Хикәйә

Ҡуйташтар араһында ҡәҙимге тормош дауам итте. Һутҡа тулышҡан еләктәрҙең байтаҡ өлөшө ат тояҡтары аҫтында иҙмә булып иҙелһә лә, ҡалғандары ҡояшҡа бит ҡыҙҙырып, ғәмһеҙ генә тороуын белде. Ҡайһы саҡта иҫеп киткән ел генә маҙаһыҙлап ҡуя уларҙы. Еләк-сәскәләрҙең хуш еҫенә тере йәнде айбандырып, мәйет еҫе лә ҡушылып китә. Ҡураныс ҡына бер түмһәнән сыға унынһы. Был хәтле әшәке еҫкә түҙеп, бер кем дә уға яҡын юлламаҫ кеүек. Әммә уға нәҙек кенә һомғол кәүҙә эйелгән. Яурындарының дерелдәп тартышып-тартышып китеүенән был йәш баланың ҡайғыһы оло икәнен аңлап була. Йәнәшәһенән ҡаҡ һөйәк кенә икенсе кәүҙә сүгәләгән. Унынһының да төпкә баткан күҙҙәрендә йәш тамсыһы йымылдай. Үҙ ғүмерендә үлемде күп күргән унынһы, һәр береһе өсөн түгерлек сырағында һыуы ҡалмаған инде.

- Ярар, Айтуған улым, бик бөтөрөнмә. Оҙаҡ ғазапланмаған Берек ҡорҙаш, ауыртыу ҙа һиҙеп өлгөрмәйенсә, йәнен тәслим ҡылған...

Ҡарама ҡайрыһындай ярғыланып, ҡарайып бөткән ҡулдар үçмерҙең арҡаһынан ҡаҡылдатып яратты.

- Аҡсабый бабам, әйт әле, олатайым бәхеткә ирештеме, тегендә нәнәм, атайым менән күрештеме икән?

- Кеше заты инанғанына ирешә ул, балам. Батыр үлеме хаҡында хыялланғаны тормошҡа ашты бит. Тирмә түрендә маҙрап ултыра торған йәштә лә күпме дошмандарҙы ҡырып, ҡартлыҡтан түгел, уктан вафатын тапты.

Үçмерҙең ҙур, ҡара күҙҙәренән осҡон сәсрәне, йөҙрөктәре йомарланды.

- Улайһа, тыңла, бабам. Күсемде ҡырҙырырға яҫҡынған Бүҙәнде эҙләп табырмын. Төбәгендәге иң бейек тау башына ботон-ботса, ҡулын-ҡулса ботарлатып, биш яҡҡа ерләтермен! Бына минең инанысым!

- Аһ, балам, аҡылыңа кил. Әле балалығыңа барып әйтһәң дә, һин ҡор башы бит. Ҡорбаш һүҙен һүҙ итмәһәң, хур булырһың.

- Булмам! Ашырырмын! Сиреүен оло тау итеп өйөп ҡуйырмын! Үҙ күсемде шундай итеп ҙурайтырмын, Дәшт Ҡыпсаҡ илендә иң көслө ырыу булыр!

- Хыялың болоттарҙан бейек ашты түгелме? Бер кеше ғүмере етмәҫлек бит! Улдарыма васыят ҡалыр.

Аҡсабый ҡанбаба үçмерҙең йыуаш ҡына баланан ажарланып, харап үсле бей булмаҡсы һыҙатына баш сайҡап ҡуйҙы. Килер бер көн, олатаһының "Аҡсабыйҙы тыңла" тигән нәсихәтен дә онотасаҡ был егет. Бер кемгә лә ышанмаған, бер кемгә баш бирмәгән ғәййәр ир буласаҡ. Хәҙер ҡанбабаның бурысы - йәш ҡор башының күңелендәге мәрхәмәт осҡондарын мөмкин тиклем һаҡлау, ырыу-күсте гонаһһыҙҙар рәнйешенән аралау. Айтуған ҡылыҡты ҡылып торор, ҡанбабаһы ырыуға уның ғәйебе менән килер ҡаҙаны кисектерергә бар көсөн һалыр. Ғүмеренең аҙағына тиклем бер йәш баланы ҡанбаба итеп әҙерләп өлгөрә алһа ярар ине...

* * *

Айтуған уйын тормошҡа ашырыуға бөтә көсөн, ваҡытын арнаны. Барымталар бер аҙ туктаңҡырағас, бәләкәй-бәләкәй төркөмдәр булып, унан-бынан ҡайта башлаған яугирҙарҙы барланы. Уларға, тағы ла балалыҡтан саҡ сыға башлаған малайҙарға, ил-күстән яҡшыраҡ тәғәмләнергә әмер итте. Иң оҫта һуғышсыларҙы асыҡлап, һуғыш уйынын өйрәтеүҙе йөкмәтте. Был уйындарҙа үҙе айырыуса бирелеп ҡатнашты, өйрәтеүселәренән дә бер башҡа өҫтөн булмайынса туктамаҫҡа, тигән бурыс ҡуйғайны үҙенә. Шымсылар, һаҡҡолаҡтарҙы үҙ янына нығыраҡ яҡынайтты. Береһе - берҙе, икенсеһе төптә бөтәнде һөйләгән хәбәрҙе тыңлап, үҙенә кәрәк асылды аңларға өйрәнде...

- Ваҡыт, - тине Айтуған, ҡомда сыбыҡ менән һыҙылған үҙе генә аңлаған эҙҙәргә ҡарап. - Өс көндән оло яуға күтәреләбеҙ. Шуғаса ҡатын-ҡыҙ, балаҫағаларҙы Көнтөшмәҫебеҙгә йәшерәбеҙ. Ырыуҙан бер тере йәнде бер ҡайҙа сығармаҫҡа, сит-еһер күренһә - һөнгөгә алырға. Бүҙән ахмаҡ түгел, һаҡ ҡолаҡтары һәр яҡта йөрөп ята булыр...

Айтуғанды йәпләмәһә лә, ҡаршы ла төшмәй Аҡсабый. Күрәһең, ҡылаһы шулдыр ҡорбашының. Әле ҡайғыһы икенсе - күс тарҡалып ҡуймаһын. Ана, Беректең икенсе, Айтуғандан олораҡ ейәне, нисек тешләнеп йөрөй! Үҙенең ҡорбаш булырға ниәте булғандыр ҙа, яуҙа йөрөп ҡалды. Бер уйлаһаң, Алғыр ҙа бит, айһай, айбарлы зат. Сәсәнгә тиң әйтерлек зиһене лә, теле лә бар. Айтуғандан бер ере лә кәм түгеллеген үҙе лә белә, шуға бигерәк эсе күмһейҙер. Ҡустыһына ҡаршы ирҙәрҙе күтәрмәүе - тегеһененң хаҡ юлда икәненә инаныуҙандыр. Бүҙән йөртон юк итеп, тормош һилләнгәндәй булһа, башланыр инде тартҡылаш. Туғанға туған йөҙрок төйөүен булдырмаҫҡа көсө етерме Аҡсабыйҙың? Был һорауға яуапты көтәһе лә көтәһе әле.

* * *

Айтуғандың яугирҙары йәшендәй хәрәкәт итте. Бүҙәндең шымсыһы ҡайтып хәбәр бирергә өлгөрә алманы - бағауылдың осло һөңгөһө йөҙйәшәр имәнгә ҡуша ҡаҙаҡланы үҙен. Шунан башланды ла инде. Шау-шыу, һөңгө-ҡылыс зыңлауы, инрәү-һыҡтау ауазы, йылҡы-мал сырҡырауы, саң-туҙан, кеше-кешене ишетмәҫлек тә, аңламаҫлыҡ та мәхшәр. Күпмелер ваҡытҡа Күктәр бер ырыуҙың аһ-зарына һаңғырау булып, икенсенең ҡан көҫәгән булмышына яй ҡуйҙылар...

Тау араһында аулаҡ ҡына аҡланда төйәкләгән булған икән Бүҙән. Таҙа, татлы өс йылға һыулаған. Айтуған үҙ һүҙен нығ тотто - иң бейек тауҙың биш тарафына күмелде Бүҙәндең бүлгеләнгән мәйете. Ир заттарының береһе иҫән ҡалманы - оло тау булғансы тураҡлап өйөлдө, йорт-усаҡтар туҙҙырылды, малдар ҡыуылды. Ҡор башына һис килешмәгәнсә бәйһеҙ тотто үҙен Айтуған. Яуҙан һуң ҡып-ҡыҙыл булып аҡҡан ҡан йылғаһы ергә лә һеңмәҫ элек, бар доньяны яңғыратып: "Мин еңдем!" - тип һөрәнләне. Шаңдау уның артынан бары тик "Мәндем" тип кенә ҡабатланы. Талсыған ҡара тирен һөртөп ултырған Алғыр, ҡорбашының яугирҙарын уйлау, яралыларҙы-үлгәндәрҙе барлау урынына, малай-шалайса ҡыҫҡырынғанына йәне көйөп:

- Бер ҙә артыңдан ҡабатламай әле төбәк хужаһы, ярымйорто ғына ишеттерә, - тип төрттөрҙө.

- Ҡабатлар! - тип тешен ҡыҫты Айтуған.

* * *

Йәш байталдың татлы бешкән һутлы итен мөнйөп кенә бөткән Айтуғанға Бүҙәндең тағы бер ир әкрәбәһе табылыуын хәбәр иттеләр. Бәләкәй генә көмрө ҡарт булып сыҡты унынһы, иҫе лә инәрле-сығарлы ғына икән, аҡһаҡ та өҫтәүенә. Тәүге енеүенән иҫергән, йөрәкһегән һәм күнеле лә, тамағы ла туклыҡтан ирәбеләнгән Айтуған үҙенең ҡаты ҡуллы ғына түгел, хуш күңелле лә башлыҡ булыуын күрһәтергә була:

- Нәсел ҡалдырырлыҡ рәте булмаһа, йәшәһен әйҙә! - тип ҡул һелтәне. - Илһеҙ оҙон ҡышты сыға алмаҫ барыбер. Ярты аҡылдар менән генә көс һынашырға ҡалғайны тағы...

Эште көмрө Килтәй үҙе боҙҙо. Береһе зәңгәр, икенсеһе ҡуңыр төҫтәге ике күҙен баҙлатып:

- Гонаһ уй менән бер ҡатын да дәнемә тейеп быҫратманы ошоғаса, улан. Изге мин! - тине.

Ике төрлө күҙҙәрҙең самаһыҙ тәкәббер ҡарашынан, етмәһә, ярандары алдында "улан" тип мыҫҡыл итеүенән ҡорбашының бәрейе ҡупты.

- Һине доньяға килтергән әсәң дә гонаһ шомлоғо булған инде, әләйһән, ә, көмрө түмгәк?

- Ҡуйсы, Айтуған ҡусты, Күктәр тарафынан рәнйетелгәнде рәнйетмә, ҡарғышы төшөр...

Үҙен һөйһөнмәгән Алғырҙың өндәшеүенә Айтуған бөтөнләй сығырынан-сыҡты.

- Күктәр тарафынан рәнйетелгән? Улай булғас, әйҙә, бер изгелек ҡылайым байғошҡа! Эй, кем әле һин, Килтәй тинеңме? Һайла анау оҙон сәстәрҙең береһен! Әжәлең алдынан бер ләззәт кисереп ҡал! Теге доньяла иҫкә алырға бер рәхәт булыр! Атаң эшләмәгән изгелекте мин ҡылайым - әпирмәгән кәләшен мин бирәйем!

Яугирҙарҙың күбеһе аңһыҙ хахылдашты. Айтуғанды телдән шаярыу менән генә ҡалыр тип уйланылар, буғай. Буҙлауҙарын, илаулауҙарын ишетмәҫ, шешенгән ҡара ҡайғылы йөҙҙәрен күрмәҫ өсөн яландың арғы мөйөшөнә һырыҡтырылған ҡыҙ-ҡырҡын, ҡыҙсыҡ-ҡортҡаларға ла һүҙҙең айышы барып етте, күрәһең, бүре күргән һарыҡ өйөрөләй өрктөләр. Уларҙың һәр береһен иң белә белгәне бирле "Ана, Килтәй килә" тип ҡурҡытып үçтергәндәр. Ул Хоҙай бәндәһенең ҡағылыуы ғына түгел, күҙ ҡарашы төшһә лә йәнгә-тәнгә өшәнес тә баһаң! Хатта әле баҫып алған ҡоралды-көслө ят ырыу яугир-һуғышсылары барыһы бергә лә алам-һалам ғына кейемле Килтәй аҡһаҡтан артыҡ ҡурҡыныс түгелдәр. Һуғышсылар ҙа ни бары ирҙәр генә бит. Еткән ҡыҙҙарҙы шунда уҡ бүлешеп алырҙар. Ҡол итәме, кәнизәкме - сибәрлек тә унғанлыҡтан ғына тора. Ҡыҙсыҡтары аҫрауға, тәрбиәгә таратылыр. Күптәре етем төҫөн дә күрмәй, йәбер-золом да белмәй үçер ҙә китер. Ҡарсыҡ-ҡорсоҡтон яҙмышы ла белгән һөнәренән торор. Үләнтамырҙарҙы таный, сихәтле-шифалы төнәтмәләр әҙерләй, йылан-саяндарға ҡаршы көслө әйтемдәр әйтә белә икән, ҡарһүҙҙәр уйлап сығарып әүрәтеүгә оҫта икән - яңы ырыуҙа ла ситкә тибелмәҫ. Тик үҙ ырыуынан ҡыуылып килгән йәшелкенсәк янына ғына ебәрмәҫтәр. Йәш килендәр менән генә мөғәлләмә башҡасараҡ. Уларҙы йыл үтмәйенсә бер кем дә кәнизәк итә алмай. Дошман ҡанынан таҙарыныу өсөн был мөҙҙәт.

Эйе, был доньяла шулай ҡоролған - енеүсе генә өҫтөн. Теләһә - ғүмер бүләк итә ала, теләһә - ҡоллоҡ, теләһә - әжәл. Ә енелеүсе? Ә енелеүсенең бер генә хоҡуғы бар - буйһоноу. Йәшәргә теләһәң унынһы. Теләмәһәң, тағы бер хоҡуғың - енеүсенең башына ҡарғыш яуҙырып, шәһит китеү.

* * *

Ниндәй генә йолҡош һәм меçкен булмаһын, Килтәй буйһоноусыларҙан түгел ине. Әжәле Айтуған сүрәтенә инеп, танау төбөндә киҫтән болғап торһа ла, уның тауышы ҡалтыранманы.

- Аң бул, улан! Ҡыҙыу ҡаның һыуынып, йөрәшөнән туктар мәл килер. Шул ваҡытта ҡылғандарың өсөн үкенерһең, әммә үткәндә ҡайтара алмаçһың. Үҙеңде ҡарғармын, ә ауырлығы ҡәүемеңә төшөр. Әйткәнеңдән ҡайт - һүҙеңде кире ал!

- Сиңерткә сырылдағанынан да шөр ебәреп, һүҙ боҙоп ултырырға мине кем тип беләң! - Айтуғандың ҡан һауған күҙҙәре ҡурҡыныс аларҙы.

Кипкән ботаҡ кеүек ике беләк күккә һонолдо. Тик Килтәй ҡәҙимге ҡарттарса устарын өҫкә ҡаратып түгел, ҡулының һыртын өҫтән ҡуйып әйтте һүҙҙәрен:

- Был ҡәүемдең ҡарғалары һандуғастан өҫтөн булһын. Бөркөттәре үçер булһа - үçмәçтәйе ҡанатын суҡып торһон, мин әйттем! Батырҙары телһеҙ-күҙһеҙ булһын. Теллекүҙлеһе тыуа ҡалһа - бәгере ҡаты, уйы тар булһын, мин әйттем! Халҡы хакимдан унмаһын, хакимы халыҡтан булмаһын, мин әйттем! Үҙе торһон, ҡәүеме - ҡороһон, мин әйттем!

- Ҡарғышыңдың алғышын әйтеп кит, Килтәй! - ситтәрәк торған Алғыр, ҡапыл уянғандай, ҡарттың һүҙен ишетеп ҡалырға ҡабаланып яҡынайҙы.

- Ҡарты ҡатҡан билен бөгөп, йәше телһеҙ телен бөрөп, ҡәберемде уратып теҙләнеп һораһа, шунда булыр алғыш...

- Һа-һа-һа, - мәҙәк һүҙ тыңлағандай ирәбе торған Айтуған ажарланды. - Һин, меçкен, ҡәберем булыр тип өмөт итәһеңме ни әле? Сәсрәткәнсе бер һуғыуыма һөйәктәрең ошо һырт буйлап йән яҡҡа таралаçаҡ бит!

- Ерләтмәһәң дә ауырлығы үҙеңә...

- Ҡарғышың - ҡара башыңа! - йәш егет үҙ ырыуына үҙе күрәләтә бәлә һалғанын, оло ҡайғылар килтерәсеген уйлап та еткермәçтән, ниәтен ҡылды...

**(Дауамы бар).**

*✓ Мин бик ышаныусан кешемен. Алдыма ҡуйған маҡсаттарыма, хыялдарыма ышанам һәм шуның арҡаһында ғына улар тормошҡа ашып килә лә инде.*



ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# ХЫЯЛҒА ЭЙӘРЕП...

## бейенем дә киттем

**Бөрйән районы Байназар ауылы егете бик үҙенсәлекле сәнғәт төрөн һөнәр итеп һайлаған. Көнсығыш сәнғәтендә бик популяр булған бейеү төрө - брейк-данс менән шөғөлләнә ул. Хәйер, башта ул хобби булараҡ ҡына ҡыҙыҡһыныу уята йәш кешелә, аҙаҡтан йән аҫырар һөнәргә әүерелә. Йәш бейеүсе Алтынай ВӘЛИТОВ бөгөн беҙҙең һорауҙарға яуап бирә.**



**➔ Алтынай, сит мәмләкәттәр өсөн хас булған сәнғәт төрө менән нисек ҡыҙыҡһынып киттең?**

- Бик ижади, йыр-бейеүгә һәләтле ғаиләлә тыуып-үҫкәнмен. Өләсәйем менән олатайым Сәмиғә менән Марс Баязитовтар береһе оҫта йырсы, икенсеһе шәп бейеүсе. Әсәйем һөнәре менән сәнғәттән йыраҡ торһа ла, күңеле менән ижадсы - ҡурайҙа ла, думбырала, ҡумыҙ, фортепианола уйнай. Атайымдың ҡулы оҫта, ағастан һырлап әйберҙәр эшләй. Әйткәндәй, мин атайыма ҡарап, художестволы әйберҙәр етештереүсе тигән һөнәр ҙә үҙләштерҙем. Мәктәптә уҡығанда йырлап йөрөнөм дә, бер мәл бейеү менән ҡыҙыҡһынып киттем. 2008 йылда телевизорҙан "Минута славы"ла брейк-данс күрҙем, һикереп төшөп, сальто әйләнеп тороп бейейҙәр. Минең дә өйрәнгем килде. Кемдәндер өйрәнер инең, ундай кеше ауылда юҡ, хатта интернетҡа инеү мөмкинлеге лә сикләнгән. Телевизорҙан ҡарап, ҡоймаға менеп, сальто һикереп ҡарайбыҙ ҡустым Аҡъегет менән. Күршеләрҙә компьютер, унан һуң интернет барлыҡҡа килгәс, почта аша өйрәтеүсе дискылар яҙҙырып ала башланым. Бер урында тороп сыҙамайым, төрлө шөғөлдәргә тотоноп ҡарайым. Әммә брейк-данс мәңгелек ҡыҙыҡһыныуым, ахыры...



**➔ Ике һүҙ менән генә үҙеңә ҡылыҡһырлама бир, тиһәм, нимә әйтер инең?**

- Мин бер ҡасан да бер нәмәнән дә ҡурҡмайым. Хатта артыҡ тәүәккәлмен. Ниндәйҙер мөмкинлек килеп сыға икән, сығам да китәм. 2013 йылда икенсе каналда "Большие танцы" тигән телепроект үтте. Өфөлә кастинг булманы. Мин был турала һуңлабыраҡ ишеттем һәм был мәлдә Ҡаҙанда ла һайлап алыу туры үтеп киткәйне. Киләһе тур Һамар ҡалаһында ине, мин шул көндө үк Һамарға сығып киттем. Һәр эштә һәләттән тыш, тәжрибә лә мөһим, ул ваҡытҡа мин артыҡ тәжрибә туплап та өлгөрмәгәйнем. Шулай ҙа баһалау комиссияһы мине һайланы. Шулай итеп, "Большие танцы" проектында ҡатнашып ҡайттым. Был сара үҙемде үҫтереү өсөн ҙур мөмкинлектәр асты. Өс ай буйына мин проектта ҡала алдым һәм брейк-данс буйынса ғына түгел, төрлө стилдәге заманса бейеүҙәрҙә камиллаштым. 2015 йылда интернеттағы иғлан буйынса Украинаның Төркиәлә эшләгән бейеү коллективына эшкә киттем. Ул йылдың февраленән алып октябргә тиклем Анталья ҡалаһында йәшәп, төрлө ҡалаларҙа сығыш яһап йөрөнөм коллектив менән.

Икенсенән, мин бик ышаныусан кешемен. Алдыма ҡуйған маҡсаттарыма, хыялдарыма ышанам һәм шуның арҡаһында ғына улар тормошҡа ашып килә лә инде.



**➔ Өфөлә ҡалып, үҙеңдең бейеү студияһын асҡың килмәйме?**

- Яйлап беҙҙең илдә лә бейеү мәҙәниәте күтәрелер ул. Тик йәш, һаулыҡ ныҡ саҡта үҙем сәхнәлә йөрөп ҡалғым килә. Үҙем брейк-данстың бар нескәлегенә төшөнгәс, студия асырға ла, уҡытырға ла була, әлегә ундай маҡсатым юҡ. Һин ниндәй генә оҫта булһаң да, һинән дә оҫтараҡ кеше табыла, шуға камиллашырға кәрәк. Ғаилә ҡороп өлгөрмәгәнмен, шуға ла бер юлы сит илдәр күреп, бер юлы унда сығыш яһап ҡайтырға ниәтләнәм. Әлегә сит илдәрҙәге ойошмаларҙан тәкдимдәр көтәм.

Атайым ситтә йөрөүемә лә, халыҡ әйтмешләй, "еңел-елпе" эш менән булышыуыма ла ыңғай ҡарамай, әлбиттә. Әсәйем был йәһәттән миңә ныҡ ышаныс белдерә, һәр теләгемде күтәрмәләп тора. Атайым да минең менән ғорурланыр киләсәктә, үҙем дә уның ышаныстарын аҡлармын, тип ышанам. Ғөмүмән, миңә берәйһе шаярып ҡына ла: "Һаман шул бейеүең менән бәпәйләнеп йөрөйһөңмө?" - тип әйтһә лә, сәмләнәм дә, эстән генә, күрерһегеҙ әле, тип ҡуям. Брейк-дансты, нишләптер, балалар шөғөлө тип ҡарайҙар шул беҙҙә. Минең 30-40 йәшлек брейкерҙарҙы күргәнем бар. Унда ҡәтғи талаптар юҡ, үҙеңдең һәләттәреңә ҡарап, шул йүнәлешкә иғтибарҙы күберәк бирәһең. Мәҫәлән, кемдер һығылмалы, улар һығылмалылыҡҡа бәйле стилгә өҫтөнлөк бирә, кемдәлер көс-ҡеүәт ташып тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, ти Алтынай һәм эшләй белгән эштәрен һанап сыға: "Ауылда үҫкән егет булараҡ, утын ярам, бесән сабам, ихатала ир-аттар башҡарған башҡа эштәрҙе эшләй беләм, ағастан һырлап төрлө һындар яһайым, йырлайым, гитарала уйнайым, тәмле итеп ашарға бешерә лә беләм". Ул хатта брейк-дансты башҡорт бейеүе элементтары менән байытып, "башҡортса" брейк бейергә лә, сит илдәргә сәйәхәтте эш менән берләштерергә лә хыяллана. 23 йәштә алдыңа аныҡ маҡсаттар ҡуя белеү - уңыштың яртыһы инде ул. Ә әлегә ул баш ҡалала ижад итә, уны төрлө урындарға сығыш яһарға саҡырыусылар бихисап.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

РУХИӘТЕБЕҘ АСЫЛЫ

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**Бер ваҡыт коллекционерҙар араһында бәшмәкселәр алтын тапҡан, тигәнерәк хәбәр таралғайны. Был ваҡиғаға 15 йыллап ваҡыт үтте һәм асыҡланыуынса, был алтындар бер ҡулдан икенсе ҡулға күсеп йөрөй торғас, Стәрлетамаҡта йәшәүсе бер кеше уны белгестәргә күрһәтә, улар иһә был алтын һүрәтен 2007 йылғы Башҡортостан атласының "Алтын Урҙа" тигән бүлегенә ҡуя. 14-се быуаттың икенсе яртыһы, "Билбауҙың бер детале" тип яҙылған унда.**

Мин белгән ваҡиға былайыраҡ яңғырай. Бәләбәй районы Берек-Алға ауылында Кесе Мәнәүез йылғыһының һул яҡ ярында ҙур талдар үҫә. Йәйге селләлә лә бында һалҡын була. Талдарҙың бер туҡтауһыҙ "йәш түгеүенә" лә иғтибар итеп, халыҡ был урынға йөрөргә ҡурҡа башлай, тиҙҙән ул йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡҡа әүерелә. Берәй һыйыр юғалһа, уны ошо урын йотҡан, тиҙәр. Шуға ла был таллыҡҡа бер кем дә килмәй, берәй ҡурҡыныс сир йоҡтороуҙан, бәлә килтереүҙән ҡурҡалар.





*"Нуғай кенәзе ҡыҙы". Модель: Е. Солдатова.*

Көҙгө бер көндө Әхмәровтарға ҡаланан үҫмерҙәр Азат менән Розалия ҡунаҡҡа килеп төшә. Бәшмәк ныҡ уңған йыл була. Был балалар ҙа бәшмәккә сығып китә, мауығып китеп, тыйылған урынға барып сыҡҡандарын да шәйләмәйҙәр. Ял итергә туҡтап, ашарға ултыралар һәм Азат: "Бындағы бәшмәкте арбалап һатырға була, юҡҡа ғына шайтан менән дуҫ булһаң, байыйһың, тип әйтмәйҙәр икән", - тип ысҡындыра. "Әйе, тик уларҙы ла һыйлап торорға кәрәк", - тип, Розалия ҡулындағы бешкән йомортҡаны дауыл ҡолатҡан ағас төбөнә һалырға ынтыла һәм аптырауынан ҡысҡырып ебәрә. Ағастың соҡоронда алтын һибелеп ятҡан була. Һары алтындан яһалған 11 предмет ала улар. Табыш тураһында бер нисә йыл берәүгә лә өндәшмәйҙәр, тик бер ваҡыт аҡса кәрәк булғас, һаталар. Был турала туғандары аша ауылда ла билдәле була. Алтын табырға теләүселәр күбәйә.

Һүҙ археологтарға ла барып ишетелә. 2005 йылда бында ҡаҙыныу эштәре башлана, был турала Г.Н. Гарустовичтың "След великой замятни" тигән китабында ентекләп яҙылған. Автор был урында сауҙагәр карауаны таланған, тигән версия тәҡдим итә. Тәңкәләргә ҡарап, ваҡыты 14-се быуаттың өсөнсө сирегә, тип билдәләнә. Табылған алтын әйберҙәр иртә ислам мәҙәниәтенә ҡарай, уларҙы Мономах шапкаһы биҙәүестәре, Петр Беренсенең Себер коллекцияһы менән сағыштырырға була. Спинктың Лондон коллекцияһында ла уларға оҡшаш әйберҙәр бар. Иң ҡыҙыҡлы әйбер - цилиндр формаһындағы Ҡөрән һауыты ситкә һатылған. Билдәле меценат М.Ф. Сарбаев беҙгә процентһыҙ кредит биреп, тиҫтәгә яҡын әйберҙе һатып ала алдыҡ. Улар шул тиклем нескә итеп эшләнгән, шуға ла бер нисек тә билбауҙың детале була алмай, тигән фекергә килдек. Туғыҙ предмет башлыҡ биҙәүгә тотонолдо. Ул тулыраҡ булһын өсөн, аҙаҡҡы унынсы деталде лә башлыҡҡа тегеп ҡуйҙыҡ. Ул "Нуғай кенәзе ҡыҙы" кейемдәрен тулыландырҙы. Әлбиттә, беҙ был версияның дөрөҫлөгөнә дәғүә итмәйбеҙ.

**Владимир БЕССАРЕНКО, "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы хеҙмәткәре.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ ХИСЛЕРӘК?

■ Лондонда үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, баланың һүрәтенә ҡарап, уның үҫмер саҡта интеллектуаль һәләтенең кимәле нисек буласағын билдәләп була. Британия психологтары 15 мең игеҙәкте тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. 4 йәшлек саҡтарында улар кеше һүрәтен төшөрә. Ғалимдар балаларҙың ижадын 12 баллы система менән баһалай. Бынан тыш, балалар интеллект коэффициентына тест үтә. 10 йылдан һуң яңынан үткәрелгән тест һүрәттәр менән 14 йәштәге тест араһында бәйләнеш барлығын асыҡлай. Шулай ҙа ата-әсәләргә баланың һүрәтте насар төшөрөүенә көйәләнергә ярамай. Интеллектҡа күп кенә генетик һәм экологик факторҙар йоғонто яһай. Ә холоҡ үҫешенең нигеҙендә темперамент ята.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйынса "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда хис-тойғоға байыраҡ, тигән стереотип булһа ла, ғалимдар бының киреһен раҫлаған. 15 ғаилә башлығы һәм 15 ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә төрлө һынауҙар үткәргәндән һуң, көслө зат ҡайһы бер ваҡиғаларҙы ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға көслөрәк кисереүе асыҡланған, әммә улар үҙҙәрен хислерәк икәнен барыбер танмаған. "Гүзәл зат илағыраҡ, ул эмоциялар ҡоло, тигән фекерҙе аңыбыҙға һеңдереп бөткәндәр. Тик ир-егеттәр был йәһәттән уларҙан һис ҡалышмай, киреһенсә, ҡайһы берҙә нығыраҡ ҡайғыра, ихласыраҡ шатлана. Йәмғиәттә был ирҙең көсһөҙлөгө булып ҡабул ителгәнгә күрә, улар тойғоларын күрһәтеп бармай. Бала саҡтан малайҙарҙы, ир кеше иламай, тип тәрбиәләүҙең йоғонтоһо ла бар был күренештә", - ти тикшеренеүҙең авторы Дэвид Льюис.

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# ИЗГЕ ЭШТӘРЕ...

## дәүерҙең бер шаңдауы булһын

### Бала Сытырмандың оло сараһы

Федоровка районының Бала Сытырман ауылына йыйылған ағинәйҙәр ҡоронда мәртәбәле ҡунаҡтар - район хакимиәте башлығы Радик Ишмөхәмәтов, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Рузалия Хисмәтуллина, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Башҡортостан юлдаш каналы журналисы Гөлдәриә Йосопова, шулай уҡ Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ райондарының ағинәйҙәр ҡорҙары вәкилдәре ҡатнашты һәм байрамға йәм өҫтәне. Йола буйынса, район етәксеһе Радик Ғилметдин улы сараны асып һүҙ әйтеп, Федоровка ерендә бер нисә милләттең үҙ-ара татыу йәшәүенә, әммә башҡорттарҙың, ер хужалары булараҡ, рухиәт һағында тороуына айырым баҫым яһаны. Яңы Яуыш ауылы халҡының "Айыҡ ауыл" республика конкурсына ҡушылып, айыҡлыҡ өсөн көрәштә лә башҡаларға өлгө күрһәтеүен билдәләне. Район башлығы, әйтерһең, ошо һүҙҙәре менән кисәнең йөкмәткеһен билдәләне. Артабан төрлө ауылдарҙан килгән ағинәйҙәр сәхнәлә башҡорт рухиәтен сағылдырыусы йолаларҙы сәхнәләштереп күрһәтте, тарихи хәтерҙе яңыртты. Яңы Яуыш ауылы ағинәйе Тәзкирә Ғәлина иһә һүҙҙе айыҡлыҡ өсөн көрәш юҫығында дауам итте:

- Бала Сытырман ауыл биләмәһенә ҡараған Яңы Яуышта эскелектең гөрләп сәскә атҡан мәле ине. Күҙ алдында милләт зәғифләнә, эскелектән бынамын тигән апай-ағайҙар гүр эйәһе була. Беҙ, ауылдың ағинәйҙәре һәм аҡһаҡалдары, эскесенең яҙмышы үҙенең ҡулында тип уйлап, ҡул һелтәп ҡуймайыҡ, ауылды эскелек һаҙлығынан һөйрәп сығарырға тырышып ҡарайыҡ әле, тигән маҡсат менән иң тәүҙә спиртлы эсемлек һатыусылар менән һөйләшеү алып бара башланыҡ. Яйлап ҡына янныбыҙға олораҡ йәштәге абруйлы апайҙарҙы һәм ағайҙарҙы ылыҡтырҙыҡ, бергәләп ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләргә, эскән ҡатындарға, спиртлы эсемлек һатыусыларға барып, аңлатырға тырыштыҡ. 2014 йылда иһә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иғлан иткән "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашып, хатта еңеп сыҡтыҡ. Шуныһы ғына үкенесле: 2014 йылда ла, 2015 йылда ла конкурс еңеүселәре рәсми билдәләнмәне... Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөгөн дә беҙ ошо бәйгенән алған рух күтәренкелеге менән йәшәйбеҙ, халыҡтан аҡса йыйып, мәсет төҙөү эшенә тотондоҡ...

Яңы Яуыш ауылындағы ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар, уҡытыусыларҙың тәрбиә, ойоштороу эшенең һөҙөмтәһен раҫлаған бер матур миҫал булараҡ ҡабул ителде "Ынйылар" балалар фольклор ансамбле сығышы. Был балалар әле яңы ғына Әлшәй районында уҙған "Башҡортостан ынйылары" конкурсында 2-се урын яулаған. 18 мартта Мәләүездә үткән "Халыҡ уйындары" республика конкурсында гран-при яулағандар.

Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева үҙ сығышында ил башлығы Владимир Путиндың, йәмәғәт ойошмалары эшен хупларға, ярҙам итергә кәрәк, тигән фекеренә баҫым яһаны. Эшләгән һәм эшләйһе эштәрен барланы һәм иң әүҙем ағинәйҙәрҙең иңенә яулыҡ япты. Кеше араһында мәртәбәләп маҡтап, яулыҡ ябыу - халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаһы икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы ул. Ғөмүмән, Сәлиә Шәрифйән ҡыҙының үҙенең дә республиканың төрлө йәмәғәт ойошмалары, шулай уҡ ағинәйҙәр ҡорҙары эшендә әүҙем ҡатнашыуы, уларға ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышыуы һоҡландыра.

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Рузалия Хисмәтуллина ла үҙ сығышында ҡатын-ҡыҙҙың донъя тотҡаһы булыуын һәм Федоровка ағинәйҙәре ойошторған был сараның шуға раҫ килеүен билдәләне. "Айыҡ ауыл" республика конкурсының ойоштороу комиссияһы ағзаһы Гөлфиә Янбаеваның: "2014 йылдағы конкурсҡа йомғаҡ яһап ҡуйыу мәсьәләһен юғары инстанцияларҙа яңынан күтәреп сығыу тураһында һеҙгә, ошо районда депутат булған кешегә, мөрәжәғәт итәм: бер әмәлен табып, халыҡты дәртләндереү сараһын күрәйек әле", - тигәнен дә күңеленә һалып ҡуйҙы.

Райондың ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Рәйфә Вәлиева үҙҙәренең эшенә ҡыҫҡаса байҡау яһаны. Билдәләүенсә, нимә генә эшләмәй ағинәйҙәр үҙ ауылдарында: милли, дини байрамдарҙы бергәләп үткәреү, зыяраттарҙы, мәсеттәрҙе тәртиптә тотоу, тәбиғәтте һаҡлау, 50, 60 йыл бергә йәшәгән парҙарҙы тәбрикләү, боронғо йолаларыбыҙҙы тергеҙеп, йәш быуынға тапшырыу... Хәйер, ағинәйҙәрҙең бөтә эштәрен дә теҙеп һанап бөтөрлөк тә түгел шул, әммә шуныһы мәғлүм: бәлки, ҡайһы бер эштәре бөгөн үк һөҙөмтә лә бирмәҫ, әммә милләт әсәләре, шағир әйтмешләй, милләт бишеген дә бәүелтә. Шуға күрә улар тәрбиәһендә үҫкән йәштәрҙең, балаларҙың уңышы киләсәктә һөйөндөрөр әле, тип өмөт итәйек.

Күберәген Юрматы ырыуы башҡорттары ағинәйҙәрен туплаған сара, йәш айырмаһына ҡарап тормай, өлкәндәрҙең дә бейеп-йырлауы менән бергә үрелеп барҙы. Өлкән йәштәге апайҙарҙың төҫ ташламай матур һаҡланыуының сере нимәлә икән? Юрматы еренең илаһи хозурлығына бәйлеме, әллә күңел торошо сағыламы ул йөҙ-ҡиәфәттә? Сараны йәнле итеп алып барған Тәзкирә Ғәлинаның ауыҙынан сыҡҡан йөрәк һүҙҙәре тотош төбәк ағинәйҙәренең асылын күрһәтте, рухи талпыныштарын сағылдырҙы һымаҡ: "Ағинәйҙәр милләт яҙмышын ҡулға алырға бурыслы. Ҡайҙалыр - яҡшы һүҙ, икенсе ерҙә - яҡты сырай, өсөнсө урында - эшлекле кәңәш, дүртенсе тарафта бәрәкәтле ғәмәл менән ауылдарҙа ҡот, ырыҫ арттырыу ниәте менән янайыҡ!"- тип мөрәжәғәт итте ул йыйылыусыларға. Сараның мәртәбәһен күтәреп, ағинәйҙәргә ышаныс белдереп килгән, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған район хакимиәте башлығы Радик Ишмөхәмәтовҡа ла рәхмәтле булды ҡатын-ҡыҙҙар. Күп нәмә етәксенән тора! Бына тап ошо сәғәттә түгел, киләсәктә ағинәйҙәр хәрәкәтенең емештәрен тирер әле федоровкалар.

### Мәрхәмәтле милләт - мәртәбәле

Күгәрсен районында ла күркәм ҡор йыйҙы ағинәйҙәр. Унда райондың ғына түгел, ә күрше Ейәнсура, Мәләүез, Көйөргәҙе, Сибай, Ырымбур ағинәйҙәре лә ҡатнашты. Райондың ҡаты сиргә дусар булған балаларына - Түкән ауылынан Гөлфиә Аҡкөбәкова менән Ҡаҙир




*Ҡунаҡтар Федоровка районы ағинәйҙәре менән.*

✓ *Ағинәй булыу - ул ҡартлыҡ билдәһе түгел, ә мәртәбәлек, рухилыҡ сағылышы, милләт ғәме менән йәшәү билдәһе. Ағинәйҙәр тигән исем аҫтында, йәшенә ҡарамай, беләгендә дәрт, йөрәгендә ғәм, рух булған һәр ҡатын-ҡыҙ туплана ала.*



ауылынан Билал Байғусҡаровҡа матди ярҙам күрһәтеү ҙә ине "Мәрхәмәтле милләт - мәртәбәле" тип аталған был ҡорҙоң тағы бер маҡсаты.

Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Баянов ҡорҙо асып, мәрхәмәтлек акцияһын ойошторған район ағинәйҙәренә рәхмәт белдерҙе. Ә Күгәрсен районы ҡыҙы, Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева Гөлфиә менән Билалдың сәләмәтлеге тураһында күптән белеүе, уларға Мәскәү клиникаһына операцияға барыу өсөн юллама менән ярҙам итеүе тураһында хәбәр итте. Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы был сараға ла буш ҡул менән килмәгәйне: ул районның ағинәйҙәр ҡорона ноутбук бүләк итте, мәртәбәле ағинәйҙәр иңенә шәл-яулыҡтар япты.

Артабан республика ағинәйҙәре хәрәкәте етәксеһе Гөлфиә Янбаева иң әүҙем ағинәйҙәргә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Рәхмәт һәм Маҡтау ҡағыҙҙарын тапшырҙы, йәнә лә бер тапҡыр ағинәй булыу - ул ҡартлыҡ билдәһе түгел, ә мәртәбәлек, рухилыҡ сағылышы, милләт ғәме менән йәшәү билдәһе, тине. Тимәк, ағинәйҙәр тигән исем аҫтында, йәшенә ҡарамай, беләгендә дәрт, йөрәгендә ғәм, рух булған һәр ҡатын-ҡыҙ туплана ала, тигәнгә ишара булды был.

Күгәрсен районына беренсе тапҡыр түгел барыуым. Унда булған һайын халыҡтың ҡаҡшамаҫ рухына, көрәшсе затынан булыуына инанып ҡайтыла. Юҡҡа ғына тап был ерҙә тыумағандыр ил ағалары, халҡы ғәме менән йәшәгән ил ҡыҙҙары. Милләт хәстәре менән янған Бәндәбикәне иҫкә төшөрөү генә лә етә. Был юлы ла ағинәйҙәр ҡорона Бәндәбикә рухлы ҡатын-ҡыҙҙар тупланған икәненә шаһит булынды. Шуларҙың береһе - районның ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе, биш бала әсәһе Әминә Әҙелғужина. Ул бөгөн район ағинәйҙәрен төрлө эштәргә дәртләндереп, әйҙәп кенә ҡалмай, "Ете ҡыҙ" ательеһы асып, төбәк ҡатын-ҡыҙҙарына милли нағышлы күлдәктәр, дини кейемдәр ҙә тегә. Байрам сәхнәһендә төрлө йәштәге район ҡатын-ҡыҙҙары тап "Ете ҡыҙ"ҙа тегелгән кейемдәрҙә дефиле күрһәтте. Бәләкәс кенә ҡыҙҙар менән бергә сибәр һылыуҙар, өлкән йәштәге апайҙар матур итеп атлап, күлдәк өлгөләре менән таныштырҙы. Бик тә оҡшаны был күренеш тамашасыларға!

Һәр хәрәкәте, ым-ишараһы менән ысын башҡорт асылын кәүҙәләндергән сәсәниә Асия апай Ғәйнуллинаның сығышын бигерәк оҡшатып тыңланы халыҡ. Ул Мораҡ мәҙәниәт йортон ҡунаҡ булараҡ биҙәне, йәштәргә илһам өҫтәне. Етмәһә, үҙе ошо яҡ килене лә икән. Боронғо ағинәйҙәргә хас тотошо, һәр йоланы тәрәндән белеп һөйләүе, уларҙы арымай-талмай халыҡ араһында таратыуы уның үҙен бөгөнгөбөҙҙөң хазинаһы яһаған. "Урал батыр" эпосынан өҙөктө ул ана ҡалай һеңдереп уҡый! Сабыйҙарҙы әүәй итеүҙе ана нисек моңло итеп башҡара! Юҡҡа ғына халыҡ ижадын дөрөҫ аңлаусыларҙы, халыҡҡа дөрөҫ еткереүселәрҙе тылсымсыға тиңләмәйҙәр, күрәһең. Асия Солтан ҡыҙы ағинәйҙәргә тәрән фәһем генә биреп ҡалманы, ә оҫталыҡ дәресе лә күрһәтте. Унан өйрәнергә кәрәк милләт ҡотон һаҡлау серҙәренә!

Һәр сығыш араһында Күгәрсен районы ағинәйҙәре милли йолалар менән таныштырҙы, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре дәртле йыр-бейеүҙәре менән ҡыуандырҙы. Ул арала иғлан ителгән мәрхәмәтлек акцияһына һәр кем үҙ өлөшөн индерергә ашыҡты. Кисә аҙағында күңелдәрҙе йылытыр һан яңғыраны сәхнәнән: ярҙамға мохтаж балаларға 123 мең һум аҡса йыйылған! Шул саҡ Ер шарына Аллаһы Тәғәләнең 123 мендән ашыу бәйғәмбәр ебәргәне хаҡында мәғлүмәт хәтергә төштө. Был да бит юҡҡа түгел, тимәк, сабыйҙарҙың сәләмәтлеге өсөн ихлас башҡарылған ғәмәл барышында Күктәр үҙе лә был мәрхәмәтлек аҙымына фатиха биргән. Акцияны ойоштороусылар залға мөрәжәғәт итеп:

- Был ике балаға 50-шәр мендән бүлеп биреп, ҡалғанын районның инвалид балалар менән шөғөлләнеүсе ойошмаһына тапшырһаҡ, һеҙ ризаһығыҙмы? - тип һораны. Зал алҡыштарға күмде тәҡдимде.

Республикала ағинәйҙәр үткәргән бар саралар ана шулай рух күтәренкелеге, ниндәйҙер анык ғәмәлдәр менән үтә. Уларҙың эштәре менән рухланып яҙылған бер шиғырымды тәҡдим итәм уҡыусылар иғтибарына.

*Асмандарҙан тороп ете ҡыҙ ҙа*
*Әйҙәп торған саҡта сафлыҡҡа,*
*Ҡан хәтерен йәндә тергеҙәһең,*
*Ҡот ҡояһың бөгөн халыҡҡа.*

*Асылыңдан алып ҡуҙ һалаһың,*
*Йөрәгенә һәр бер башҡорттоң.*
*Әй, Ағинәй,*
*Шомло заманда ла*
*Ҡәүемемдең йөҙөн балҡыттың!*

*Ата-бабаларҙан ҡеүәт алып,*
*Тупраҡтарҙа тойоп ал ҡанын,*
*Урал тәғлимәтен еткерҙең һин,*
*Йәншишмәлә ғәмде сайҡаның.*

*Һәр бер һүҙең һинең - үҙе доға,*
*Һәр ишараң иман нығыта.*
*Һомайғоштан ғына яралдыңмы,*
*Милләтемә булып сал бата.*
*Әйткәндәрең беҙҙе йырлата ла,*
*Һәр кинәйәң йәнде илата!*
*Аһ, Ағинәй!..*

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Ағинәйҙәр үткәргән сараларҙа һәр саҡ ир-егеттәр ҙә ҡатнаша икәнен беләм. Был юлы ла тамаша залында байтаҡ ине улар. Ауылдар биләмәләре башлыҡтары, район Советы депутаттары, башҡа вазифалы кешеләрҙең күпселеген, әлбиттә, ир-егеттәр тәшкил итә ине. "Хоҙайбирҙин тоҡомонан ул!" тип таныштырҙылар мине Ирек Раял улы Юдаев менән. Ул - Хоҙайбирҙин, Ялсы, Түбәнге Һапаш, Вәлит, Юлдаш ауылдарын, Киров утарын берләштергән биләмә хакимиәте башлығы. Бына инде 16 йыл халыҡ ышанысын аҡлап, ошо вазифала ихлас күңелдән хеҙмәт итә. Бөгөн был ауылдарҙың береһендә лә араҡы һатылмай. Ирек Раял улы эште урындағы рухлы милләттәштәренә таянып башлаған. Ауылдарҙа иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыуға бағышлап, йыйындар үткәргәндәр. Әлбиттә, был эшкә иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ ихлас ҡушылған. Йыйылыштарға килмәгәндәрҙең өйөнә барып, һорау алыу ойошторғандар. Һөҙөмтәлә район Советына ауыл биләмәһендә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу хаҡында ҡарар сығарыуҙы һорап мөрәжәғәт иткәндәр. Бөгөн Хоҙайбирҙин төбәгенең тәҡдимен Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тикшерергә йыйына. Тәртибе шулай: ошо төбәктә иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуҙы туҡтатыу буйынса һәр ауылға ҡағылышлы, йәғни 6 закон сығарылырға тейеш. Бына бит, теләгән юлын таба, ә теләмәгәндәргә бөгөн демократия, кем нимә теләй - шуны эсә, нимә теләй - шуны сығарып һата. Ә бит, Ирек Раял улы әйтеүенсә, был ауылдарҙа эскәндәр, бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан әҙәмдәр ҙә юҡ. Ләкин оло бәлә ишек шаҡығансы тотонғандар был эшкә. Балаларҙың, йәштәрҙең айыҡ йәшәйеш өлгөндә йәшәүҙәрен маҡсат итеп ҡуйғанға баҫҡан улар был юлға. Бында һәр ауылда тиерлек спорт майҙансыҡтары бар, киләһе йыл тағы ла бер нисәүһен сафҡа индерергә ниәтләйҙәр.

Хоҙайбирҙин ауылы егете, Мәләүездә бокс секцияһында балалар менән шөғөлләнгән Рәзиф Әмиров, аҙна һайын ҡайтып, тыуған ауылында ла уҡыусыларҙы спорт серҙәренә өйрәтә. Маҡтағы ғына килеп тора бындай аҫыл егеттәрҙе. Улар бит бер ниндәй дан-шөһрәт, кеше күҙенә салыныу өсөн түгел, ә йөрәк ҡушыуы буйынса тотонған был ниәткә.

**Лариса АБДУЛЛИНА.**
**(Аҙағы. Башы 15-се һанда).**



*Күгәрсен районы ағинәйҙәре.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

**Йәмғиәт тарафынан көсләп тағылған ғәйеп тойғоһо.** Ул мәктәптә, уҡытыусыларҙың талабына тап килмәгән осраҡта барлыҡҡа килә. Һеҙҙе даими рәүештә, тырышыраҡ булһаң, уҡытыусыңдың өмөтөн аҡлай алаһың, тип, тәртибегеҙ өсөн ғәйеп тойғоһо кисерергә мәжбүр итәсәктәр. Мәсьәләнең аңын-тоңон аңламайынса, уҡытыусылар үҙ эшен еңеләйтеп, уҡыусыны ғәйепле булырға мәжбүр итә. Сөнки ғәйеп тойғоһо контролдең һөҙөмтәле ысулы булып тора.

Төрмә системаһы - ғәйеп тойғоһо теорияһының ғәмәлдәге сағыу миҫалы. Әгәр һеҙ йәмғиәттең әхлаҡи нормаларына ҡаршы киләһегеҙ икән, һеҙҙе төрмәгә ябалар. Йәнәһе, яза үтеп, ҡылған ғәмәлегеҙ өсөн ғәйеп тойғоһо кисерәсәкһегеҙ. Ғәйебегеҙ ни тиклем тәрән, шул тиклем оҙаҡ яфаланасаҡһығыҙ. Тотҡонлоҡта булғандан һуң һеҙҙе иреккә сығаралар, әммә төп проблема - хаталы Аң, түбән үҙбаһа хәл ителмәй ҡала. Ахырҙа, элекке енәйәтселәр тағы ла ҡабат енәйәт ҡылып, тағы ла төрмәгә эләгә.

Антисоциаль тәртип өсөн ғәйеп тойғоһо кешенең нимә әйтерен уйлап борсолоу тыуҙыра. Бына ни өсөн беҙ этикетты һаҡларға тырышабыҙ икән. Күпселек өсөн бысаҡты тәрилкәнең ҡайһы яғына һалыу мәсьәләһе бик мөһим.

Беҙ шул тиклем кеше фекеренә ҡолаҡ һалабыҙ һәм сәйәси корректлыҡ тураһында уйланабыҙ, бер кемде лә кәмһетмәҫ өсөн һәр аҙымыбыҙҙы үлсәп баҫабыҙ, ауыҙыбыҙҙы үлсәп асабыҙ.

**Шәһүәтле ғәйеп тойғоһо.** Бындай тойғо күптәргә хас. Бының төп сәбәбе - дин. Ул шәһүәтлек сағылышын яҡшы һәм насарға, тәбиғи һәм гонаһлы формаларға бүлә. Бындай субъектив әхлаҡи баһалар, йоғошло сир кеүек, быуындан-быуынға тапшырыла.

Әгәр ҡиммәттәрегеҙ системаһы әхлаҡи күҙлектән ҡабул ителмәгән шәһүәтлелектең теләһә ниндәй формаһын үҙ эсенә алһа, һеҙҙе йәмғиәт оятлы һәм ғәйепле тойорға мәжбүр итәсәк. Һөҙөмтәлә күпселектә комплекс барлыҡҡа килә, улар үҙҙәрен һәр саҡ ғәйепле тоя.

Кешегә бала саҡтан уҡ, секс - яуызлыҡ, тип һеңдерәләр икән, ул олоғайғас та енси мөнәсәбәттәрҙең айырым формаларынан, үҙендә ғәйеп тойғоһо кисермәйенсә, ҡәнәғәтлек алмаясаҡ. Бер мөһим һабаҡты үҙләштермәһәк, хәл-торош үҙгәрмәйәсәк: үҙегеҙ һайлаған ҡиммәттәргә ҡаршы килмәй һәм башҡаларға зыян итмәй икән, шәһүәтлелектең ниндәйҙер формаһы өсөн ғәйеп тойғоһо кисерергә ярамай. Ул ғына ла түгел, ул, башҡалар нимә уйлауына ҡарамаҫтан, дөрөҫ тә, яңылыш та түгел. Ғәйеп тойғоһоноң абруйлы сит кеше әйткән субъектив баһа йоғонтоһонда формалашыуын да онотмағыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 18 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Маргарита Назарова". Биографический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.
03.10 "Модный приговор" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Без следа". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Следователь Тихонов". "Я - следователь". Детективный сериал. "Гонки по вертикали". 1-я серия (16+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.45 "Без свидетелей. Павел Фитин против Шелленберга", "Иные. Особое измерение". Часть 1-я. Док. фильмы (12+).
02.25 "Срочно в номер. На службе закона". Детективный сериал (16+).
03.20 "Убийство в Каннах. Савва Морозов". Док. фильм (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
